*Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ*

# БАШҠОРТ ДВОРЯНДАРЫ ДИНАСТИЯЛАРЫ: СОЛТАНОВТАР, СЫРТЛАНОВТАР

*Башкорт халкының айырыуса XVIII—XIX быуаттарҙа йәшәгән атаклы, дәрәжәле түрәләре һәм укымышлы шәхестәре — тархандар, дворяндар, кантондар, абыҙдар, ахундар, мөфтиҙәр — тормошо һәм эшмәкәрлеге бығаса бик аҙ өйрәнелде. Күпмелер тикшерелгән тигәндә лә, әүәлге синфи караштан сығып, акһөйәктәр, феодалдар, капиталистар, дин әһелдәре тип кире нарыклап, ғәҙәттә кара мөһөр баҫыла киленде. Бындай ғәҙелһеҙлекте хәҙер күптән төҙәтергә вакыт. Иғтибарҙан бөтөнләй ситтә калған башкорт дворяндарынан ғына һүҙҙе башлайык.*

Башҡорт дворяндары тарихы Екатерина Икенсе батшабикәнең 1785 йылда сығарылған Рәсәй дворяндары хаҡындағы указы нигеҙендә асыла. Был указ буйынса дворянлыҡ исемен биреү йә мәхрүм итеү хоҡуғы губерна дворян йыйылышы ҡарамағына тапшырыла. Ырымбур губернаһы дворяндары кенәгәһенә ҡарағанда, 1793 йылда башҡорттарҙан беренсе башлап дворянлыҡҡа Күсәрбай менән улы Аралбай Аҡсулпанов теркәлә. Шул ваҡыттан алып XIX быуаттың 40-сы йылдарына тиклем дворяндар нәҫел-тоҡомо кенәгәһенә бары 19 башҡорт дворян заты индерелә. Улар Башҡорт ғәскәрендә егерме бишәр-утыҙар йыл хеҙмәт иткән юғары дәрәжәле чиновниктар йәки кантон башлыҡтары ғына.

Башҡорт дворяндары династияһын барлыҡҡа килтергән был затлы фамилиялы тәүге нәҫел-тоҡомдар шулар:

Аҡсулпановтар, Собханғоловтар, Бакировтар, Ҡәюповтар, Кейековтар, Моратовтар, Ҡыуатовтар, Солтановтар, Сыртлановтар, Тутаевтар, Йәһүҙиндәр, Маҡсутовтар, Янышовтар. Быға шәхси дворянлыҡты алған Ишмөхәмәт Сөләймәнов, Абдуллатиф Ғәмбәров, Ғисмәтулла Ҡайсаров, Мөхәммәткәрим Монасипов, Яҡуп Юнысовтар өҫтәлә. Быларға тағы һуңыраҡ башҡорт Нуғайбәковтар, Рафиҡовтар, Өмөтбаевтар, Ҡотлобаевтар, Ибраһимовтар династияһы ялғана. Улар араһында дворянлыҡ дәрәжәһе нәҫелдән-нәҫелгә күсер кантон башлыҡтарынан бигерәк тә Ҡыуатовтар, Солтановтар, Сыртлановтар, Өмөтбаевтар, Ибраһимовтар, Ҡәюповтар династияһы Рәсәй һәм башҡорт илйорто ҡаршыһында тарихта шаҡтай ҙур абруй ҡаҙана.

Рәсәйҙең башҡорттар хаҡындағы 1863 йылдың 14 майында сығарылған положениеһында баш-

ҡорт дворяндарының урыҫ дворяндары менән тиң хоҡуҡлылығы законлаштырыла. Шәхси дворянлыҡ дәрәжәһенең һәм хоҡуғының бөтә ғаиләгә, нәҫелдән-нәҫелгә күсеүе нығытыла. Шул йәһәттән 1897 йылғы Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәрендә Өфө губернаһында башҡорт ғаиләләре эсендә — 512 йән, Ырымбур губернаһында 452 йән кеше дворян заты тип иҫәпләнгән.

Ҙур түрә һәм хәлле башҡорт дворян ғаиләләре XIX быуатта, XX быуат башында бай урыҫ дворяндары һәм эре помещиктары менән ярышырлыҡ күп ер биләмәләренә һәр мал-мөлкәткә эйә булғандар. XIX быуат аҙағында башҡорт дворяндарынан Өфө губернаһында 303, Ырымбур губернаһында тағы шунса эре хужалыҡ яҡшы билдәле. Минзәлә өйәҙендә Солтановтар, Бәләбәй өйәҙендә Сыртлановтар, Бөрө өйәҙендә Ҡотлобаевтар шундайҙарҙан иң күренеклеләре.

Элекке очерктарыбыҙҙа ҡеүәтле Ҡыуатов кантондар династияһы хаҡында, «Арҙаҡлы шәхестәр» серияһындағы «Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев» китабында Өмөтбаевтар нәҫел-ырыуҙары тураһында яҙғайныҡ. Был яҙмаларыбыҙҙа яҙмыштары менән шаҡтай ҡатмарлы, эшмәкәрлектәре менән байтаҡ ҡаршылыҡлы Солтановтар, Сыртлановтар династияһы башлыҡтарына туҡталмаҡсыбыҙ.

Үҙ замандарында бик данлы аҫыл заттар онотолоуға дусар ителмәйенсә объектив баһаланыуға һәм тарихта үҙ урындарын алырға хаҡлы.

## СОЛТАНАТЛЫ СОЛТАНОВТАР

Минзәлә башҡорттарының дворяндар аҫыл затынан Солтановтар династияһының заманында солтанатлы саҡтары булған. Бай кантон башлыҡтары, ҡаты ҡуллы оло түрәләр, уҡымышлы хәрбиҙәр, мировой судьялар, хатта мөфти заттар тигән исем-шәрифтәре өйәҙҙәргә генә түгел, губерналарға, Рәсәй мосолмандары араһында киң таралған. Ниндәй дәрәжә биләмәһендәр, ҡайҙарҙа булмаһындар, исем-аттары алдан йөрөгән, арттарынан ҡалмай яманаттары ла эйәргән. Оло түрәләргә кем генә гел бағынып йәшәһен: ҡул аҫтынағы тирә-йүне ялағайланған, баҫымсағы өнһөҙ баш эйгән, баш бирмәҫе, үслеһе яманатын һатҡан. Ана, тәбиғәттең дә салт аяҙ йә йонсоу көндәре, йылы вә күркәм, ҡарлы-буранлы миҙгелдәре булыр. Йәмғиәт тормошо — тәбиғәт түгел, күпкә ҡатмарлыраҡ һәм сетереклерәк шул. Әҙәмгә үҙ ҡылығын ҡылмай, тәҡдиренә яҙғанын күрмәй булмай.

Был йәһәттән Солтановтар династияһы, уларҙың быуыны, атаҡлы шәхестәренең эшмәкәрлеге үҙенсә бер төрлө үрнәкле һәм ғибрәтле лә ул. Тарих һабағы булырлыҡ. Солтановтар шәжәрәһе ағасынан, мәҫәлән, үткән ике быуат араһында ғүмер һөргән Мөхәммәтйәр мөфти Солтановтың шәжәрә тармағы шундай: Мөхәммәтйәр — Мөхәммәтшәриф — Баязит — Ғәбделйәлил — Солтан — Мөхәммәт (Мәмәт) — Субан — Туҡтар — Күҙәй — Ҡотлош — Аҡъюл — Юлбирҙе — Төркәйбирҙе — Тәүкил — Шаһҡолой — Тоҡсаба. 16 быуын. Бик оҙон генеалогия был. Һәр быуын ғүмерен уртаса 35-38 йыл хисабынса һалғанда ла шәжәрә башы XIII быуатҡа барып сыға. Тоҡсаба — Дәшти-Ҡыпсаҡ иленең ҡара-ҡыпсаҡ ҡәбиләһенең Ҡыпсаҡ хан заманындағы бейҙәренең береһе, тарихи шәхес. Уның исемен XIII быуаттағы ғәрәп сәйәсәтсеһе һәм ғалимы Ибн-Халдун яҙмаларында осратырға мөмкин. Этнографтар раҫлауынса, башҡорттарҙың Минзәлә өйәҙе байлар ырыу тармағы шул замандарҙағы ҡараҡыпсыҡтарға барып тоташа.

Һуңғы биш-алты быуынға Солтанов фамилияһын биргән Солтан бабалары ла аҫыл заттарҙан булыуы ихтимал. Ҡыҙғаныска ҡаршы, әлегә документтар табылмаған. Әммә нәҫел-ырыуына солтанатлы аҫыл фамилияһы нығынып ҡалған. Тәү мәғлүмәттәр «Мәғлүмәт» журналын-

да (1914 йыл) баҫылған. Төпләнгән ауылдары Күҫәкә ҡариәһе икәне мәғлүм.

**Ғәбйәлил Солтанов.** Солтанов фамилияһын алған ғаилә башы. Атаһы Солтан атлы.

Ғәбйәлил Солтанов хаҡында аныҡ документтар бар. Ул Минзәлә өйәҙенең Күҫәкә ауылының башҡорт йорт старшинаһы (юртовый старшина). Хәрби хеҙмәт юлын үткән. 1772 йылда Польшаның Бар конфедераттарына ҡаршы походта ҡатнашҡан. Поход старшинаһы вазифаһын башҡарған, батырлыҡтары өсөн сотник итеп тәғәйенләнгән.

1773-1775 йылдарҙағы ихтилал осоронда иһә Ғәбйәлил сотник хәрби хеҙмәттәрен тейешенсә баһалаған хөкүмәт яғында ҡала, Рәсәй батшалығының тоғро һалдатына әйләнә. Әбей батшаның манифестарын тотоп, үҙ йорто ҡарамағындағы яугир ир-егеттәренең хөкүмәткә тоғролоғон һаҡларға тырышып йөрөй. Ләкин Пугачевты яҡын күргән яҡташтары старшиналарын хөкөмгә тотоп бирәләр. Әммә Ғәбйәлил старшина нисектер был хөкөмдән ҡасып ҡотола, уның төбәгендәге күп башҡорттар Пугачев яҡлылар яғына барып ҡушыла.

Нисек кенә булмаһын, Рәсәй хөкүмәте походный старшина Ғәбйәлил Солтановтың батша яғында ҡалыуын юғары баһалай: уға яңы чиндар, наградалар бирә, һуңыраҡ ике улы менән бергә дворянлыҡ дәрәжәһен алыуға ирешә.

XVIII быуат аҙағында Башҡортостанда кантонлыҡ системаһы индерелгәс, Ғәбйәлил Солтанов 11-се башҡорт кантонының башлығы итеп тәғәйенләнгән. Кантон үҙәге Минзәлә өйәҙенең Мостай ауылы булғас, Солтановтар нәҫел-ғаиләләре тотошлай тиерлек шунда күсеп төпләнгән. Бынан һуң инде уларҙың ер биләмәләре күпкә киңәйеп, мал-мөлкәттәре күрелмәгәнсә байып, бөтәйеп киткән.

Дворянлыҡ хоҡуғын алыу менән династия билдәһе — Солтанов фамилияһы быуындан-быуынға күскән.

Шулай итеп, Ғәбйәлил Солтан улы Солтановтан Солтановтар династияһының дворян дәрәжәһе алып, кантон башлыҡтары булып Рәсәй батшалығына тоғро хеҙмәттәренең тотороҡло юлы башлана.

Ғәбйәлил Солтанов үҙ нәҫел-ырыуын үрсемле һәм ишле иткән ир ҙә. Унаң ике бисәһенән һигеҙ ул һәм шунса ҡыҙ, әллә ни хәтле байлыҡ һәм мөлкәт ҡалып, Солтановтар нәҫеле XIX быуаттың тәүге яртыһында бик ишәйеп китә, ярты ауылды биләгән аҫыл зат тоҡомға әүерелә.

**Баязит Солтанов.** Ғәбйәлил старшинаның оло улы. Ул шулай уҡ атаһының юлын ҡыуған. Хәҙер башҡорттар хәрби сословиеға ингәс, Баязит әрмелә 25 йыл хеҙмәт итергә тейеш булған. Шул хәрби хеҙмәттең ябай һалдаттан зауряд-есаул, унан хорунжий, сотник, походный старшина, аҙаҡ майорғаса баҫҡыстарын үткән, тир-ҡан менән яуланған званиеларын алған. Ул юлда кордон хеҙмәттәрен дә, оҙайлы походтарын да кисергән. Үҙ йортилендә йорт старшинаһы, кантон башлығы ярҙамсыһы, атаһы вафатынан һуң кантон башлығы вазифаларын башҡарған. Был фиҙакәр хеҙмәттәре өсөн Владимир таҫмаһына тағылған алтын миҙал менән бүләкләнгән, үҙе, бөтә ғаиләһе мәңгелек дворянлыҡ исемлегенә индерелгән.

Баязит Солтанов кантон 11-се башҡорт кантоны башлығы булып алғас, йөҙәр дисәтинә ерҙәрҙе үҙ шәхси биләмәһе итеп ялғатҡан; байып алғас, биш һыу тирмәне төҙөткән, өс поташ заводы һалдырған. Шулай эре баярға, промышленникка әйләнгән.

Был Баязит кантон Солтанов аҙаҡтан Ырымбур мосолман рухи шәрғиәһенең мөфтие булып китер Мөхәммәтйәр Солтановтың ҡартатаһы булыр.

Баязит Ғәбйәлил улы Солтанов 1823 йылда 50 йәшендә донъя ҡуйған.

**Мөхәммәтрәхим Солтанов.** Ғәбйәлилдең икенсе улы. Ул да Баязит ағаһы кеүек 25 йыллыҡ хәрби

хеҙмәттең бөтә ауырлығын күргән, кордон һаҡлау, хәрби поход юлдарын үткән, рядовой һалдаттан майорғаса хәрби чиндарға эйә булған. Ағаһынан һуң 11-се башҡорт кантонының кантон башлығы вазифаһы уға күскән. Кем йортта яһауыл — оло йортҡа бағауыл, тигәндәре шулдыр.

Мөхәммәтрәхим Солтанов Рәсәй хөкүмәтенә, Ырымбур губернаторына тағы тырышыбыраҡ хеҙмәт иткән, күрәһең — ул дүртенсе дәрәжәле Изге Станислав ордены, Анна таҫмаһына тағылған алтын миҙал, бриллиант йөҙөк менән бүләкләнгән. Заманында иң егәрле һәм ҡаты ҡуллы кантон башлыҡтарынан һаналған.

Байлыҡ, мөлкәт, ер биләмәләре йәһәтенән дә ул байтаҡ кантондарҙан, үҙ ағa-энеләренән уҙҙырып ебәргән буғай. Мәҫәлән, үҙ ерендә ике тирмән һалдырған, дүрт поташ заводы тотҡан, 150 дисәтинә ер биләгән, 12 крепостной крәҫтиәне булған. Серегән баяр исеме менән ҡатар яуыз Мүкән кантон тигән яманаты ла ҡалған халыҡ телендә. Мөхәммәтрәхим тигән игелекле исеменә битәр рәхимһеҙ түрә тигәне алда йөрөгән. Үҙе иҫән сағында уҡ мәрхүмдәргә генә бағышланыр «Мүкән кантон» тигән бәйет сығарылған. Мөхәммәтрәхим-Мүкән кантондың бер туй мәжелесенә бәйле ул.

«Бер заманда башҡорт таифәһенең рәйестәренән бер рәйестәре бар ине, Мүкән кантон тиерҙәр ине үҙен, — тип башлана был бәйеттең һүҙ башы. — Ул кантондың бер оло мәжлесе ваҡытында бер фәҡир әҙәм килеп керҙе. Атаҡлы кантон ул фәҡирҙе мыҫҡыллап йортонан ҡыуған сағында фәҡир: «Әфәнде, йә кантон хәҙрәт, туй мәжлесе — бер йәм-гәм мәжлеселер, һәр кем килһә лә ярайҙыр», — тине. Кантон әйтте: «Туй мәжлесе уйын-көлкө вә шиғыр мәжлеселер. Шиғыр белһәң, ҡал», — тине. Фәҡир әйтте: «Мин шиғыр беләмен, ләкин ҡурҡамын ки, мин фәҡиренде туҡматып сығартырһың». Кантон әйтте: «Ундайын һөнәрең булһа, ант итәмен ки, асла ул эш булмаҫ», — тине. Ошонан бәйет башланып китә:

Был саҡ юлдаш булдым һиңә
Сәй, ҡаймағың ҡайҙа?
Атаң һинең Ғәбделйәлил
Йөрөнө ҡорһаҡ үҫтереп,
Һуңынан торҙо ҡәрендәшең
Йөмлә Баязит ҡайҙа?
Китте улар бер сәғәттә
Ошбу фани донъянан.
Күреп һуңынан ғибрәт алһаң,
Нәмрудтән аҡылың ҡайҙа?
Ваҡыт етһә, был йыһандан
Китәрһең һәм һин аға.
Тар ҡәбергә керер итһә,
Тәүбә-иманың ҡайҙа?
Нисә әҙәм тәүбәһеҙҙәр
Тамуҡ эсендә ҡалдылар,
Һин дә унда инер булһаң,
Сабира йәмилең ҡайҙа?
Салковский, судиялар
Берлә тәғәм ейгәнең
Һуңынан тороп ҡала
Тулы дворяндарың ҡайҙа?..
Күп әҙәмгә йәбер-яфа
Һалдың инде, эй, аға,
Ҡиәмәттә үс алырҙар
Фәҡирҙәр зары ҡайҙа?...

Бәйетсе ауылдашы шулай Мөхәммәтрәхим-Мүкән кантонды ҡәһәрләп һәм иҫкәртеп бәйетен әйткәндә кантондың нәҫел-нәсәптәренән Шәйхеислам, Шаһимәрдән, Шәйхиморат, Шәйхиәхмәт исем-атына, Фәрхийыһан, Хәбибъямал, Бибиямал һ.б. ҡатын-ҡыҙ заттарына атап та иҫкәртмәле һүҙҙәрен еткерә.

Мөхәммәтрәхим кантон Солтанов етмеш йәшкә яҡын ғүмер һөрөп, 1841 йылды донъя ҡуйған. Бәйетсе әйткәнсә, оло гонаһлы йәне тамуҡҡа туранан-туры барып төшкәнмелер, әммә унан донъялыҡта ҙур ер биләмәләре, бай мал-мөлкәт, ишле ғаиләләр ҡалған. Яманатлы исеме ырыуҙаштары араһында оҙаҡ йөрөгән.

Солтановтар нәҫел-нәсәбенең ишлелеген, аҫыл заттарының нисек икәнен һәм әлеге исемләнгән кешеләренең кемлеген белер өсөн Рәсәйҙә 1859 йылды үткәрелгән халыҡ иҫәбен алыу документына, башҡорт халыҡ телендә 10-сы рәүиз тип

йөрөтөлгән мәғлүмәттәргә мөрәжәғәт итәйек.

Ырымбур губернаһы Минзәлә өйәҙе Мостай ауылы, 18-се башҡорт кантоны, 1-се йорто кенәгәһе иҫәбе кантон исемле, дворян дәрәжәле Солтановтарҙың аҫыл исемдәре ғаиләләре менән бергә асыла. Уны рус теленән һәм кириллицаның иҫке яҙмаһынан башҡортсаға әйләндереп, мәғлүмәттәрҙе бер ни тиклем йыйнаҡлап бирәбеҙ.

**Башҡорттар. Дворяндар.**

1. Шәйхелислам Мөхәммәтрәхим улы Солтанов. Отставкалағы сотник. Потомственный дворян. 42 йәштә . Ҡатыны Сәрбийыһан Әбсәләм ҡыҙы, 42 йәштә. Улдары: Шәйхизаман, 17 йәштә; Әмиртимер, 14 йәштә. Ҡыҙҙары: Мәрйәм, 9 йәш (1858 йыл вафат).

2. Шәйхелмәрҙән Мөхәммәтрәхим улы Солтанов. Отставкалағы сотник, потомственный дворян.

3. Мөхәммәтшәриф Баязит улы Солтанов. Сотник. Потомственный дворян. 52 йәштә. Ҡатыны Даниә Әбдерәшит ҡыҙы, 50 йәштә. Улдары: Арыҫлангәрәй, сотник, 26 йәштә. Ҡатыны Ғәйшә Сәйетбаттал ҡыҙы, 24 йәштә.

Мөхәммәтйәр (буласаҡ мөфти). Урядник. 20 йәштә.

4. Шәһиәхмәт Баязит улы Солтанов. Хорунжий. Дворян. 44 йәшендә 1852 йыл вафат. Ҡатыны Ғиздинә Ғәбделнасир ҡыҙы, 40 йәштә. Ҡыҙҙары: Ғәйнихәят, 12 йәштә. Улдары: Арыҫланбәк. Зауряд-хорунжий. 30 йәштә. Ҡатыны Ғәфифә Исмәғил ҡыҙы, 22 йәштә. Ҡыҙҙары Мәрйәм, 3 йәшлек. Шәйхәйҙәр. Урядник, 22 йәштә.

5. Шаһиморат Баязит улы Солтанов. Сотник. Потомственный дворян. 43 йәштә. Ҡатыны Бибилатифа Мөхәммәтгәрәй ҡыҙы, 21 йәштә. Беренсе ҡатынынан улдары: Муса, 13 йәштә. Шаһимәрҙән, 7 йәштә. Шул уҡ ҡатынынан ҡыҙҙары: Гөлсирә, 11 йәштә.

6. Дәүләтша Мөхәммәдйәр улы Солтанов. Урядник, дворян, 26 йәштә. Ҡәйнәһе: Шәмсиямал Ҡормой ҡыҙы, 46 йәштә. Ҡатыны: Бибифаиза Нурмөхәммәт ҡыҙы, 25 йәштә.

7. Ғәбделсаттар Ғәбделйәлил улы Солтанов. 1820 йылда 50 йәш. 1852 йылда вафат. Ҡатыны Сафура Ғәбделвәли ҡыҙы, 52 йәштә.

Беренсе ҡатынынан улы: Шаһихәйҙәр, 38 йәштә. Шаһихәйҙәрҙең ҡатыны Шәмсиямал Нияз ҡыҙы, 30 йәштә. Шаһихәйҙәрҙең улдары: Шаһимөхәммәт, 11 йәштә, Шаһимәрҙән, 2 йәшлек.

Икенсе ҡатынынан улы: Шәрәфетдин, 35 йәштә, уның улы Фәхретдин, 2 йәшлек.

8. Ғәбделғафар Ғәбделйәлил улы Солтанов. 14-се класс чиновник. 63 йәштә. Ҡатыны Фатима Мөхәммәт ҡыҙы, 50 йәштә.

9. Мөхәммәтйән Ғәбделйәлил улы Солтанов. Зауряд-есаул, дворян, 58 йәштә. Ҡатыны Гөлъямал Шаммаз ҡыҙы, 58 йәштә. Улдары: Мөхәммәтсадиҡ, 35 йәштә, Мөхәммәтғәлим, 24 йәштә.

10. Мөхәммәтгәрәй Ғәбделйәлил улы Солтанов. Зауряд-сотник, дворян, 55 йәштә. Ҡатыны Миңлеямал, 44 йәштә. Улдары: Шаһисолтан, урядник, 21 йәштә, Шаһимөхәммәт, 19 йәштә. Ҡыҙҙары: Бибишәрифә, 13 йәштә, Бибиғәзизә, 11 йәштә, Бибисажидә, 8 йәштә, Бибифатима, 5 йәштә.

11. Ғәбделрәхим Ғәбделйәлил улы Солтанов. 14-се класс начальник, 75 йәштә.

12. Ғәбделвахит Ғәбделйәлил улы Солтанов. 14-се класс начальник, 72 йәштә. Ҡатыны Маһитап Фазулла ҡыҙы. Улдары: Мөхәммәтвәли, 34 йәштә. Ҡыҙҙары: Зөләйха, 5 йәшлек, Бибифатима, 2 йәшлек.

13. Дәүләтгәрәй Ғәбделнасир улы Солтанов. Зауряд-есаул. Ҡатыны бар. Ике ҡыҙы: Бибифәрхийыһан, 15 йәштә, Бибифәрхибаныу, 12 йәштә.

Был 1859 йылдағы халыҡ иҫәбен алыу хаҡындағы кенәгә буйынса һәм Мәскәү үҙәк тарихи архив материалдарына ҡарағанда, Ғәбделйәлил Солтановтың алты улы ҙур ғаиләләр менән йәшәп ятҡаны

асыҡлана (ҡыҙҙарының күпме булыуы мәғлүм түгел).

Документ материалдары Мөхәммәтрәхим кантондың өс ҡатын менән йәшәгәнлеген асыҡлай: өсөнсө ҡатыны Хәбибъямал Көрмәнкәй ҡыҙы икәне билдәле. Баязит кантон Солтанов та, күрәһең, бер нисә ҡатын менән йәшәгән. Фәтхийыһан исемле икенсе ҡатыны обер-офицер Әрдәшир ҡыҙы. Был кантондың Мөхәммәтшәриф, Шаһиәхмәт, Шаһиморат тигән улдары XIX быуат уртаһында үҙҙәре ишле ғаиләле булып, ил-йорттарында арҙаҡлы шәхестәр иҫәбендә. Ана шул уландар Солтановтарҙың артабан кантонлыҡ, дворянлыҡ династияһын үҙ шан-шәрәфе менән дауам итә.

**Мөхәммәтшәриф Солтанов.** Баязит кантондың оло улы. Мөхәммәтрәхимдән һуң кантонлыҡ унның ҡулына күскән буғай. Ләкин беҙ Мөхәммәтшәриф Солтановтың формуляр исемлеген архивтан таба алманыҡ. Ризаитдин Фәхретдин «Мөхәммәтйәр мөфти Солтанов» тигән очерғында атаһы Мөхәммәтшәрифтең кантон булып эшләгәнен раҫлай. Унан был вазифа энеһе Шаһиәхмәт Солтановҡа күскән. Унның үҙен алыштырыр, береһе кантон, икенсеһе мөфти булып китер улдары: 1859 йылғы унынсы рәүиз буйынса Арыҫлангәрәйенә 26 йәш, сотник, Мөхәммәтйәренә 20 йәш, урядник.

Мөхәммәтшәриф 1874 йылда 64 йәшендә вафат.

**Шаһиәхмәт Солтанов.** Баязит кантондың икенсе улы. Ул шулай уҡ ҡартатаһы, атаһы, аға-энеләре кеүек хәрби хеҙмәттең бар баҫҡыстарын үткән. Зауряд-хорунжий чинын алған. Потомственный дворян. 9-сы башҡорт кантоны башлығы. Хорунжий булып хеҙмәт иткән Арыҫланбәк, урядник булған Шәйхәйҙәр исемле ғаиләле улдары бар.

**Шаһиморат Солтанов.** Баязит кантондың өсөнсө улы. Ул 12-се башҡорт кантонының башлығы. Хәрби хеҙмәт юлы һәм чиндары шундай: 1827 йылда урядник булып хеҙмәтен башлаған, 1832 йыл зауряд-хорунжий, 1847 йылда юртовой управляющий, 1853 йылда сотник итеп тәғәйен, 1852 йылда 12-се кантон башлығы ярҙамсыһы, 1856 йылдан башлап үҙе шул башҡорт кантоны башлығы. 1832, 1837 йылдарҙа кордон хеҙмәтендә лә булып ҡайтҡан. Рәсәй императорының варисы 1837 йылда Ырымбурға килгән ваҡытында ҡаршылау церемонияларында ҡатнашҡан һәм зиннәтле бүләктәр алған. Улы Муса Солтанов Ырымбур кадет корпусын тамамлаған. Бай балаһы — байға, кантон улы кантонға тартыр, тигәндәре шулдыр.

**Арыҫлангәрәй Солтанов.** Мөхәммәтшәрифтең оло улы. Ырымбур кадет корпусында уҡыған. Хәрби хеҙмәт юлын хорунжий булып башлаған. 1856 йылда сотник чины бирелгән. 1851-1853 йылдарҙа кантон ярҙамсыһы булып эшләгән. 1856 йылда 20-се башҡорт кантонының кантон башлығы итеп тәғәйенләнгән. Әүәл башҡорт полкында ла хеҙмәт иткән. Ғөмүмән, бөтә эшмәкәрлеге хәрби хеҙмәткә бағышланған.

Йыйып әйткәндә, Солтановтар нәҫел-ырыуынан ир-аттарҙың күбеһе хәрби кешеләр. Шул юлда потомственный дворянлыҡ исемен яулағандар. Уларҙың дүрт быуынынан алты кеше кантон башлығы итеп үрләтелгән. Етмеш йылға яҡын кантонлыҡ системаһы осоронда Минзәлә өйәҙендә ике башҡорт кантоны башлығы вазифаһын үҙ ҡулдарында тотҡандар.

Аҫабалыҡ, оло түрәлек һәм дворянлыҡ дәрәжәһе һәм хоҡуғы уларға йөҙәрләгән дисәтинә ерҙәргә эйә булырға һәм эре баярҙарға әйләнеп китергә лә киң мөмкинлектәр биргән. Өҫтәүенә улар әллә нисәмә һыу тирмәне, поташ заводтары тотҡан.

Башҡортостанда кантонлыҡ системаһы, башҡорттарҙың хәрби сословиеһы бөтөрөлөп, алтмышынсы йылдар уртаһынан граждандлыҡ хәленә ҡалдырылғас, Солтановтар дворянлыҡ хоҡуғынан файҙаланып, ер-мөлкәттәрен, байлыҡтарын һаҡлап ҡалалар, асылда күп ерҙәр

биләр, мал-мөлкәт тотар эре баярҙар-байғуралар булып алалар.

Хәйер, һуңыраҡ Солтановтар нәҫел-ырыуҙары тармаҡланып, төрлө-төрлө ғаиләләргә тарҡалғас, ҡайһы бер сәбәптәр арҡаһында бәғзеләренең шаҡтай ярлыланып, халыҡ әйтмешләй, сабаталы дворяндарға әйләнгәндәре йәки муллаларға, монтағай, ахун булып дин юлынан киткәндәре лә булыр. Ләкин, нисек кенә булмаһын, Октябрь революцияһына тиклем Минзәлә яғы Солтановтар династияһының аҫаба башҡорт ерҙәренә береккән тамырҙары шаҡтай ҡеүәтле һәм тәрән ҡалыр.

Тамыр тартҡан тарыҡмаҫ, ти, шуның бер тармағы Мөхәммәтйәр мөфти Солтанов миҫалында асыҡ сағылыр.

**Мөхәммәтйәр мөфти Солтанов**

1889 йыл аҙағы. 4 декабрҙең сыуаҡ көнө. Өфөлә ҙур тантана. Ҡаланың үҙәк урамында бер нисә урынға, уға терәлеп ятҡан Ағиҙелдең бейек яры буйлап һуҙылған урамға, Диниә назараты бинаһары түбәһенә, уның таш ҡапҡаһы башына Рәсәйҙең өс буй төҫлө һәм мосолмандарҙың йәшел флагтары эленгән. Бина, ҡапҡа баштарына кисен яндырыр өсөн иллюминацияға электр шәмдәре теҙелгән. Никольский урамы мәхкәмәи шәрғиә — назарат тирәһе йыйылы кейем өҫтөнә сапандар кейгән, баштарына сәлләләр ураған ахундар, муллалар, мосолман халҡы менән тулы. Былар Ырымбур Диниә назараты төҙөлөүенә 100 йыл тулыу байрамында ҡатнашырға йәиһә тамаша ҡылырға килгән халыҡ.

Байрам назараттың таш жәмеғмәсетендә көн үҙәгендә килгән ҡунаҡтар, мәртәбәле ғалим-ғөләмәләр ҡатнашлығында һәм мәсет эсенә һыймаған мөслим йәмәғәт тыштан тороп өйлә намаҙын уҡыу, һайланмыш дин әһелдәре мөнбәрҙән хөтбә әйтеп, ил башлыҡтарына, аҫыл заттарға оҙон ғүмерҙәр һәм рәхмәттәр күндереп доға ҡылыуҙарҙан башланды.



*Мөхәммәтйәр Солтанов*

Бынан һуң оло түрәләр, мәҙкүр ҡунаҡтар, мәндүп делегаттар Диниә назаратының иң ҙур күркәм залына тантаналы мәжлескә йыйылды. Тантанаға Рәсәй дәүләтенең төрлө тарафтарынан — пайтәхеттән, Мәскәүҙән, Ҡырым, Кавказ, Себер, Ҡаҙағстан яҡтарынан мосолмандарҙың аҫыл дин әһелдәре килгәйне. Губернатор, министр, архиерей түрҙән урын алғайны.

Мәжлесте Ырымбур Диниә назараты башлығы Шәйхелислам Мөхәммәтйәр мөфти Солтанов тәбрик һүҙе һәм император хәҙрәттәренә рәхмәте менән асып ебәрҙе. Императрица Екатерина Икенсе саниәнең назарат хаҡындағы 1788 йылғы фарманы һәм 1789 йылда мәхкәмәи шәрғиәнең эшләй башлауы тураһындағы текстар уҡылды, йөҙ йыл эсендә булған тарихына байҡау рәүешендә телмәр тотолдо. Тантанала атаҡлы ахун Хәйрулла Усманов, Стәрлебаш мәҙрәсәһе мөҙәрисе Мөхәммәтшакир Туҡаев, алыҫ тарафтарҙан килгән ҡунаҡтар ҡотлау менән сығыш яһанылар. Бик күп тәбрик телеграммалары иғлан ителде. Тантаналы мәжлес император ғали хәҙрәттәре исеменә мәрхәмәтле хат уҡып алҡыштар аҫтында тамамланды.

Диниә назаратында Мөхәммәтйәр Солтанов мөфти булған замандарҙа тәржемәсе булып эшләгән

һәм әлеге тантаналы сараларҙы ойоштороуҙа ҡатнашҡан атаҡлы әҙибебеҙ Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев ошо ваҡиғаны, уның церемонияларын бәйән иткән «Дин мөхәммәдиәнең Ырымбурский духовный собрания мәхкәмәһенең йөҙ йыллыҡ байрамы һәм ул ҡырында булған әмерҙәрҙең ҡыҫҡаса тәуарихы отчет йөҙөнән» тигән китабында (Өфө, 1903) тантананың аҙағын шулай яҙа: «Иң һуңында батшаһ император хәҙрәтенә хас риғәйәлек итәғәте изһар ҡылып яҙылған адресты уҡып, шунда әҙер мосолмандар «мәрхәбә» тип, урыҫ йәмәғәте «ура» тип, һуңынан алтмыш мосолман шул адресҡа ҡул ҡуйып ебәрҙеләр. Адрес уҡығандан һуң господин губернатор генерал майор Лев Егорович махсус килтерелгән шампанск эсемлекте ҡулына алып батшаһ император хәҙрәттәренең һәм әһел вә олуғтарының сәләмәтлегенә тост итеп, ура ҡысҡырып нуш иттеләр (йәғни эсеп ебәрҙеләр).

Йәнә тәғәмдәр ваҡытында тостар булып, мөфти хәҙрәте батшаһ император хәҙрәтенең, әһел олуғтарының сәләмәтлегенә әйттеләр. Икенсе тосты губернатор хәҙрәте собрание мәхкәмәһенең бәхет вә абруйына һәм мөфти хәҙрәттең сәләмәтлегенә әйттеләр.

Байрам кис ете сәғәттә тамам булды.

Юғарылағы мәдкүр адрестың тексы шулдыр:

«Һеҙгә императорлыҡ шәүкәте илән сәғәдәтле вә баләкел мәрхәмәтле падишаһ! Һеҙ бөйөк император хәҙрәттәренең мәрхүмә олуғ заттары императрица Екатерина саниә риғәйәттәренең хәйере өсөн тынмай хәстәрлек күреп 1788-се сәнә 22 сентябрҙә ғәли фарман һомаялары илән дин мөхәммәдиә булған риғәйәттәренең (ололауының), шәриғәт әмерҙәрен күҙәтер өсөн империяның мәшриҡ тарафындағы мосолмандар уртаһында шәһәр Уфала Дин мөхәммәдиәгә махсус Ырымбурский духовной собрание исеме илә мәхкәмә ижад итмәгә бойормоштор. Ҡаю мәхкәмә мәдкүр ғәлишан фарман илән 1789-сы сәнә 4-се декабрҙә һәм асылмыштыр. Һимметегеҙ илән ошбу көн ҡаю мәшһүр ваҡиғаның йөҙ йыллыҡ юбилейы байрамы яһап һәм Һеҙҙең әһел вә олуғтарҙың сәләмәт вә ғафифлығығыҙ өсөн илаһи тәғәләгә ихлас доғалар күндереп беҙ кем дин мөхәммәдиәнең духовный собраниеһында йыйылыусылар һәм Ырымбурский духовной округында булыусы духовной кемсәләр ошбу һимметле мәжлескә йыйылып, шәүкәтле хәҙрәтегеҙҙең тәхетенә һәм дәүләтле тыуған йортобоҙға күңелебеҙҙең тәкасаһы (теләүе) илә изге ниәтле вә шөбһәһеҙ ихлас риғәйәтлекте еткерергә ҡыйыусылыҡ ҡылабыҙ. Һәр даим Русиә еренең мөстәҡил бөйөк сорурының ул һүҙе илән тәхетте һаҡламаға һәм дәүләттең файҙаһының һәр бар ҡорбан бәхеш (бүләк) итмәгә даим таййәрбыҙ (әҙербеҙ)».

Батшаларға олуғлап тәкәллефле хат-адрес яҙыуҙың юғары стиле бына нисегерәк бит.

Был олуғ ваҡиғаны ойошторған Мөхәммәтйәр Солтановтың мөфти булып тәғәйенләнеүенә бары өс йыл ғына ине әле. Быға ул оҙон юлдар, төрлө баҫҡыстар үтеп килде. Ул төрлөһөн күргән, ут-һыуҙар кискән өлкән йәштәге кеше ине инде. Шуға тәржемәи хәленең боролмалы булыуы ла һис ғәжәп түгел.

Мөхәммәтйәр Солтановты үҙ дворяндар династияһын һәм ата-бабаларының дәрәжәле исем-шәрәфен йомғаҡлап ҡуйған һуңғы быуын вәкиле тип атарға ла мөмкин.

Мөхәммәтйәр — Мөхәммәтшәриф кантон Солтановтың кесе улы. Атаһы уны ағаһы йәки бүтән яҡын туған-тумасалары, улдары шикелле хәрби хеҙмәт йә дин юлынан түгел, бөтөнләй башҡа йүнәлешкә ебәрергә ниәтләгән буғай. Ул кесе улына өйҙә йәки мәҙрәсәлә бер аҙ дин һабағын бирҙергәнме-юкмы, билдәһеҙ, Мөхәммәтйәрен туры урыҫ гимназияһына илткән. Гимназияның ниндәйҙәренә әле — атаҡлы Ҡазан ҡалаһыныҡына!

Ҡазан гимназияһын уңышлы тамамлай Мөхәммәтйәр. Донъяуи

ғилемде, классик телдәрҙе, урыҫ телен һәм әҙәбиәтен яҡшы үҙләштерә. Көнбайыш, көнсығыш мәҙәниәте буйынса ла мәғлүм күләмдә белем ала. Имтихандарын тапшырып, Ҡазан университетына ла инә. Унда бер йыл уҡый. Әммә ауырып китеп, киләһе йылына бара алмай, университетты бөтөнләй ташлап ҡуя.

Шуныһы бер ни тиклем сәйер, Мөхәммәтйәр гимназист шикелле XIX быуаттың беренсе яртыһында Ҡазан гимназияһына килеп уҡыған һәм күбеһе университетҡа ла инеп киткән башҡорт гимназистарының байтағы университетта туберкулез йәки бүтән ауырыу арҡаһында уҡыуҙарын ҡалдырып тыуған яҡтарына әйләнеп ҡайтырға мәжбүр булғандар. Был йәшәү һәм уҡыу шарттары ауырлыҡтан йәки бүтән мохтажлыҡтарҙан, йә ҡыҫым-ҡыҫынҡылыҡтарҙан булғанмылыр, асыҡ ҡына мәғлүм түгел.

Мөхәммәтйәр талип та, кире Минзәлә өйәҙенә ҡайтып, 18-се башҡорт кантонлығына хәрби хеҙмәткә керергә мәжбүр булған. Уға тора-бара урядник чины бирелгән. 1857 йылдың көҙөнән башҡорт ғәскәре командующийы канцелярияһында һыҙмасы (чертежник) булып эшләй башлаған. Ике йыл хеҙмәттән һуң зауряд-хорунжий чинын алған.

1860 йыл башынан инде ул 20-се башҡорт кантоны башлығы. Кантонлыҡ вазифаһын тырыш башҡарған өсөн өс йыл эсендә губернаторҙан маҡтау ҡағыҙҙары алырға, бер йыллыҡ өҫтәмә түләү ялуньяһы тәғәйенләнеүгә өлгәшә. 1863 йылдың октябрендә иһә Минзәлә өйәҙенең 7-се кантонына кантон ярҙамсыһы итеп күсерелә. 1866 йылдың йәйендә инде хәрби хеҙмәт мөҙҙәтен тултырып, подпоручик чинында отставкаға сыға.

Бынан һуң Мөхәммәтйәр Солтанов эшмәкәрлегенең икенсе ҙур осоро башлана. Уға Ҡазан университетының хоҡуҡ факультетында бер йыл булһа ла юриспруденцияны өйрәнә башлау ярап ҡала — Солтанов туған өйәҙендә ғәмәлдәге суд, хөкөм хеҙмәтенә тотоноп китә. 1866 йылдың сентябренән Минзәлә өйәҙендә мировой посредник итеп тәғәйенләнә, аҙағыраҡ был вазифаһын Бәләбәй өйәҙендә лә дауам итә. Ул заманда Рәсәйҙә 60-сы йылдарҙа суд, хоҡуҡ өлкәһендә лә реформалар барғанда был мәсьәләләр күп йәһәттән яңыса һәм киҫкен генә торор ине. Башҡортостан шарттарында айырыуса ер мәсьәләләре ҡырҡыулашты. Яңы реформалар нигеҙендә суд һәм хоҡуҡ эштәрен яңыса ғәмәлгә ашырыу һис еңелдән түгел ине. Был осорҙа Мөхәммәтйәр Солтановты мировой судья итеп тә һайлайҙар — уныһы яуаплылыҡты тағы арттыра. Мир эше, хөкөм эше тип өйәҙҙән-өйәҙгә, волостарҙан-волостарға, йонсоу, һалҡын миҙгелдәр тимәй, ауыр оҙон юлдарҙан көн-төн йөрөргә, һәр саҡ ил-йорт, халыҡ араһында булырға, ҡатмарлы, буталсыҡ, ғауғалы мәсьәләләрҙе реформаларға таянып дөрөҫ сисергә, ғәҙел хөкөм сығарырға тырышлыҡ кәрәк була. Ғәҙел мировой посредник, мировой судья булараҡ, Мөхәммәтйәр Солтанов халыҡ араһында, түрәләр ҡаршыһында тиҙ арала ҙур абруй яулай, уға ҡатмарлы хоҡуҡи, гражданлыҡ мәсьәләләрен хәл итергә йыш мөрәжәғәт итәләр. Ике өйәҙҙәге суд-хөкөм эштәренең уртаһында ҡайнай. Мировой судья Солтановтың тынғыһыҙ әүҙем эшмәкәрлеген губерна күләмендә лә күреп алалар, хеҙмәттәрен юғары баһалайҙар. 1869 йылда дәүләт крәҫтиәндәренең ер мәсьәләләрен ғәҙел хәл итешкәне өсөн уны «Знак отличия» ордены менән бүләкләйҙәр. Шул йыл аҙағында ул Станислав ордены кавалеры булып та танылa.

XIX быуаттың 60-сы йылдар уртаһынан 80-се йылдар уртаһына тиклем егерме йыл эсендә Мөхәммәтйәр судья Солтанов Минзәлә һәм Бәләбәй өйәҙҙәренең земский йыйылыштары тарафынан әллә нисәмә тапҡыр мировой посредник, мировой судья итеп ҡат-ҡат һайлана, суд өлкәһендә өйәҙ участкаларының иң ауыр йөктәрен тар-

та. Ун йылдан артыҡ хәрби хеҙмәт юлын үтеп, подпоручик чинында отставкаға сыҡҡан, унан егерме йыл буйы суд-хөкөм эштәрендә ҡайнаған, әллә күпме маҡтау грамоталары, ордендар алған кавалер, потомственный дворян, кантон Мөхәммәтйәр Солтановҡа әллә ҡасан хаҡлы ялға китеп, үҙ йорт-ер биләмендә маҙырап үҙ алдына иркенләп йәшәп ятырға ине лә һуң — ҡайҙа ул, тынғыһыҙлығы, йәмғиәт, йәмғәт ғәме, эшһеҙ тора алмауы үҙен һаман вазифалы, ил-йорт ҡаршыһында тоғро һәм яуаплы аҫыл зат итеп ҡалдыра килә.

Хеҙмәттәренә, дәрәжәләренә күрә бирелгән Бәләбәй өйәҙе Әҙмей ауылы яғындағы 774 дисәтинә урман, баҫыу, ялан ер биләмәләре үҙ эйәһен көтөп ята ла бит, тынғыһыҙ йәнгә үҙ көнө һәм йүне түгел, ил-йорт көнө мөһимерәк — ул һаман йәмғиәт хеҙмәтендә.

Шуныһын да яҡшы тоя һәм иштеклэй башланы Мөхәммәтйәр: исем-атын, дәрәжәләрен һәм тоғро хеҙмәтен Өфө, Ырымбур губернаторҙары ғына түгел, Рәсәйҙең бәғзе бер олуғ министрҙары ла белә һәм баһалай икән. Губерна халҡы, мосолман ғалим-ғөләмәләре араһында ла абруйы бар. Урыҫ түрәләре менән дөйөм сәйәсәт, иҡтисад, конфессиялар, мәҙәниәт хаҡында белеп шартлатып һөйләшә ала. Юриспруденцияла белеме, тәжрибәһе ҙур. Киң ҡарашлы, мәғлүмәтле мосолман дворян нәҫеле икәнлеге әллә ҡайҙан аңлашылып тора. Ислам, дин ғилеменә генә бикләнгән зат түгел.

Ундай шәхестәрҙең кемлеге айырыуса ҙур дәрәжәгә, оло түрәлеккә һайлау йә күтәреү мәсьәләләре ҡуҙғалған саҡта һынала.

1885 йылдың ғинуарында Сәлимгәрәй Тәүкилев мөфти вафат булды. Ырымбур Диниә назаратына яңы мөфти һайлау мәсьәләһе ҡалҡып сыкты. Ҡазан, Ырымбур тирәһе мосолман ғалим-ғөләмәләре, татар сауҙагәрҙәре үҙ кандидатураһын тәҡдим итә, Өфө тирәһе, юғарыла Рәсәй түрәләре үҙҙәренә ҡулайлырағын эҙләй. Тәҡдим итеү — мосолмандарҙан, рәсми раҫлау — Рәсәй батшаһынан, оҡшатһа, раҫлай, оҡшатмаһа, юҡ. Эске эштәр министры граф Д.Толстой Александр III батшаға яҙған бер белдереүендә былай ти: «Замещение этой должности представляется затруднительным ввиду недостатка кандидатов, которые при отсутствии мусульманского фанатизма обладали бы достаточным общим образованием, основательным знанием русского языка, деловитыми способностями и были вместе с тем преданными и верными исполнителями предначертаний правительства».

Әлбиттә, мосолмандарҙың үҙҙәре ҡуйҙырырға теләгән кандидатуралары етерлек, тик улар батша ғәли йәнәптәре, министрҙар көткәнде һис тә генә ҡәнәғәтләндерерлек түгел. Бер яғы килгәндәй булһа, икенсе яғы килмәй. Тоғролоҡтарына ышаныс юҡ. Тәүкилевтар тоҡомонан атаҡлы Сыңғыҙ кенәз, кантондар династияһынан хаҡҡи статский советник Ибраһимов кандидатураларын ҡарағандар икән, тоғро хеҙмәт итәсәктәренә шикләнеп кире ҡаҡҡандар.

Губерна түрәләре оҙаҡ һайлангандан һуң ике кандидатураға туҡталып, Рәсәй эске эштәр министрлығына тәҡдим иткәндәр. Береһе — хаҡҡи штатский советник генерал Мирсалих Биксурин. Ырымбур кадет корпусында уҡыған, аҙаҡ үҙе шунда уҡытҡан, урыҫ, ғәрәп, фарсы телдәрен яҡшы белеүсе бик уҡымышлы һәм арҙаҡлы зат. Рәсәйҙең ҙур түрәләре ҡаршыһында ла абруйы бар. Тик йәше оло, сәләмәтлеге самалы. Икенсеһе — Мөхәммәтйәр Солтанов. Быныһы, түрәләр фекеренсә, иң ышаныслы кантондар тоҡомо, потомственный дворян, хеҙмәт тәжрибәһе ҙур. Урыҫса грамоталы. Мосолман фанатигы түгел. Ошо яҡтарын иҫәпкә алыптыр инде, христиандарҙың билдәле миссионеры Н.И. Ильминский Солтанов кандидатураһын ныҡ яҡлай. Шул уҡ ваҡытта Рәсәй мәғариф министры Н. Победонос-

цевҡа яҙған хаты буйынса тәкәббер генә мосолман түрәһен бик осондормауҙы ла иҫкәртеп былай ти: «Пусть он знает свое относительное положение перед архиереем, но пусть сам знает, а не доводит до крайности такой, чтобы правительство вынуждено напоминать забывшемуся иноверному представителю его пределы и права».

Эйе, Рәсәй мосолмандарының дин йәһәтенән дә рухани хоҡуҡтары бик сикләтелгән ине шул.

Оло түрәлеккә ынтылған Мөхәммәтйәр Солтанов һәр бер шартҡа итәғәт итергә, батша ғәли йәнәптәренә тоғро хеҙмәт күрһәтергә тайяр ине. Шулай әллә нисә иләктән, әллә нисәмә түрәләр күҙенән үткәндән һуң император Александр III-нең 1886 йылғы 2 ғинуар указы менән Мөхәммәтйәр Солтанов Ырымбур Диниә назаратының мөфтие итеп тәғәйенләнә һәм шул йылдың март башында был олуғ вазифаһын башҡарыу эшенә тотона.

Солтанов мөфти баштан уҡ батша бойорған бурыстарҙы, хөкүмәт ҡануны ҡушҡандарҙы һүҙһеҙ үтәргә, тоғро хеҙмәт итергә бар тырышлыҡтарын һала. Нисек тә үҙен яҡшы яҡтан күрһәтергә тырыша. Уға ислам ҡанундарынан батша закондары өҫтөн. Билдәле, кем бойорһа, шул солтан, кем йүгерһә, шул ҡуштан. Яңы мөфти — яңы һепертке баշта һәр саҡ ҡаты һеперә: батша бойорғандарҙы, хөкүмәттең XIX быуаттың 80-90-сы йылдарында мосолмандарҙың хоҡуҡтарын сикләгән программаларын еренә еткереп башҡара, үҙ мөьминдәренең, ахундарҙың, имамдарҙың фекерҙәре менән иҫәпләшеп тормай, кәңәштәренә күнмәй.

Күндәм мөфтиҙең тоғролоғон күреп алған юғары власть уны тейешенсә баһалап ҡупыртып та ебәрә: Мөхәммәтйәр Солтанов 1888 йылда 1-се дәрәжә Станислав ордены, 1896 йылда 1-се дәрәжә Анна ордены, 1898 йылда Андрей таҫмаһына тағылған көмөш миҙал менән бүләкләнә. Оло түрәләр алдында авторитеты бик үҫеп киткән Мөхәммәтйәр мөфти, әҙергә бәҙер килгән туй генералы кеүек, төрлө байрам, тантаналар уртаһында йөрөй, әллә нисәмә йәмғиәт, хәйриә ойошмаларының башлығы булып ала.

Хеҙмәтенә күрә әжере, эшенә күрә талабы — мөфтиҙең аппетиты ла үҫеп китә. Хөкүмәттән ул үҙенә элекке мөфтиҙәргә ҡарағанда күпкә юғарыраҡ ялуньяа — хеҙмәт хаҡы түләттереүгә ирешә. Дауаланыу, юл йөрөм, уҡыу-уҡытыу өсөн бер тапҡыр бирелә торған төрлө ярҙам аҡсаларын юллап ала; балаларын гимназияға, училищеларға хөкүмәт иҫәбенә түләүһеҙ уҡытыуға өлгәшә. Бер улын ҡаҙна иҫәбенән Ырымбур кадет корпусына уҡырға индерә. Ҡеүәтле министрҙарға ғына түгел, хатта батшаның үҙенә лә һүҙе үтә, үтенестәрен үтәтергә ҡөҙрәте етә.

Мөхәммәтйәр мөфтиҙең 1888 йылда тултырылған формуляр исемлеге буйынса ғаилә хәле шундай:

Тәүге оло ҡатыны был ваҡытта инде вафат. Унан ике ул, ике ҡыҙ бала ҡалған. Оло улдары Арыҫланғәлигә 26 йәш, кесе улдары Искәндәрбәккә 16 йәш. Ҡыҙҙарынан Мәҙинәгә 23, кесеһе Мәрйәмгә 17 йәш.

Икенсе ҡатыны Мәрйәм исемле. Шәйхелислам Солтановтың ҡыҙы, Ғәбделислам мөфтиҙең ҡыҙының ҡыҙы.

Был ҡатынынан ике улы, өс ҡыҙы үҫеп килә. Оло улы Сәлимгәрәйбәккә 11 йәш, кесеһе Баязитҡа 6 йәш. Ҡыҙҙары Фатимаға 10, уртансы ҡыҙы Бибизөләйхаға 8, кесеһе Суфияға 4 йәш.

Ошо ул-ҡыҙҙарын ата кеше үҙ ваҡыттарында гимназияла йәки училищела белем алдырта.

Кантон башлығы булғанда бер хәл ине — ил-йорт хеҙмәте, ә Диниә назараты мөфтие бөтөнләй икенсе олуғ вазифа — дин, рухиәт хеҙмәте. Быныһының үҙ ауырлыҡтары, сетерекле яҡтары, дин, мөьминдәр алдында үҙ яуаплылыҡтары күп.

Дин әһеленә ҡарағанда Мөхәммәтйәр көн әһеле. Уҡымышы донъяуи, яҙыу-һыҙыуы урыҫса, дин бе-

леме, мосолманлығы үтә самаса. Әүәлге эш-шөғөлө мир эше ине. Хәҙер иң олуғ дин әһеле шәйхелислам-мөфти дәрәжәһен нисек күтәрер, дин эшен нисек башҡарыр.

Хәйер, үҙенә тиклемге мөфтиҙәрҙән һуңғыһы Сәлимгәрәй Тәүкилев мөфти унан ни ары түгел. Яҙмыштары бер тиерлек. Сәлимгәрәй хәҙрәт тә хәрби кеше ине, уҡымышы, тәрбиәһе урыҫса, шөғөлө ил эше, баяр, алпауыт зат. Тәғәйенләнгәс мир эшен дә, дин эшен дә алып барған.

Мөхәммәтйәр Солтанов мөфти булып эшләй башлағас та башта иң яҡын ярҙамсылары — ҡазыйына, мөхтәсиптәренә, сәркәтиптәренә, дуҫ-иш ахундарына ныҡ таянды: белмәгәнен һорашып белде, кәңәштәрен тыңланы, ислам диненең төп ҡағиҙәләрен, тәртип-низамдарын үҙләштереп алды, дини вәғәз һөйләргә, нотоҡ тоторға өйрәнде. Фарман, фәтеүә биреүҙәре еңел ине — ҡазый, сәткәтиптәре һүҙен, сәкентөкөнөн еренә еткереп төҙөнө. Ҡөрьәнде тәфсирләй белмәүе, ғәрәпсәгә теше үтмәүе генә бәкәленә һуҡҡыланы, ҡазыйҙарҙан, фанатиктарҙан дини наҙан, дәһри тигән ләҡәптәр ишеткеләне. Әммә ҡулы ҡаты ине мөфтиҙең, ундай монафиҡтарҙың ауыҙҙарын тиҙ япты, бүтәнсә ҡауғаламаҫ урындарына ултыртты.

Солтанов мөфти булып эшләй башлаған йылдарҙа әүәлгесә мөфтиҙәрҙең ысын мәғәнәһендә дин әһеле, юғары дини мәғлүмәтле рухани башлыҡ булған замандары уҙғайны инде. Улар асылда батша тарафынан тәғәйенләнгән һәм Рәсәй империяһына тоғро хеҙмәт итер түрә әһелдәр генә ине хәҙер.

Тора-бара, үҙенсә бер оҫта тактик булараҡ, Мөхәммәтйәр мөфти хөкүмәттең ҡыҫым сәйәсәте менән мосолмандарҙың рухи-рухани ирек йүнәлешендәге ынтылыштары араһында мәғлүм бер позицияны тотоп, лоялерәк юлды һайланы. Оло түрәләрҙең дә ышанысын юғалтмаҫҡа, үҙ мосолмандарының да хәтерен ҡалдырмаҫҡа тырышты. XIX быуаттың һуңғы сирегендә мосолмандарҙың дин, мәғариф өлкәһендә ҡәҙимселәр менән йәҙиттәр тигән төркөмдәре араһында көрәш-тартыштар ҡыҙып киткән осорҙарҙа ла Солтанов мөфти ике яҡтың береһенә лә ҡаты бәрелмәне, йәҙитселәрҙе күңеле менән хупланы.

Мөфтигә үҙен хаҡ юлында йөрөр, бар дини ғәмәлдәрҙе ҡылыр хаҡ мосолман әһеле итеп танытыу фарыз ине. Быны ла ул тейешле низамға һалды.

Хажға барып хажи булыу ғәмәлен мөфти туранан-тура император Николай II алдына ҡуйҙы. Мөфти үҙе мөрәжәғәт иткәс, батша бер юлы ике ҡуян тоторға ниәтләгәндер, бәлки: әйҙә, император әмере менән хөкүмәт иҫәбенә ил-ерҙәр күреп, изге ҡалаларында булып сәфәр йөрөп ҡайтһын, берҙән, мөфтиҙең хажилыҡ исеме үҙ мосолмандары араһында абруйын күтәрер, мосолман илдәрендә император ғәли йәнәптәренең хөрмәте артыр. (Быға са мөфтиҙәр үҙ аҡсаһына йәки иғәнәләр иҫәбенә йөрөгән Мәккә-Мәҙинәгә). Шулай Солтанов мөфтиҙең хаж сәфәре тотошлай дәүләт ҡарамағына һәм контроленә алына.

Мөфти хәҙрәттәре үҙе менән биш ярҙамсы юлсыларын алып, 1893 йылдың февраль аҙағында Өфөнән Мәскәү аша хажға юллана. 9 мартта пароходта Стамбул ҡалаһына килеп етәләр. Бында Мөхәммәтйәр мөфтиҙе төрөк солтаны Ғәбделхәмид үҙ резиденцияһында хөрмәтләп ҡабул итә. Оҙаҡ ҡына әңгәмәләшеп ултыралар. Ғәбделхәмид солтан Рәсәйгә һәм уның мосолман мөфтиенә оло ихтирам йөҙөнән Солтановты Төркиәнең Ғосманиә ордены менән бүләкләй.

Хаж сәфәре артабан Урта диңгеҙ аша Мысыр иленең Искәндәриә порты, Ҡаһирә ҡалаһы арҡыры Ҡыҙыл диңгеҙҙән Ғәрәбстанға — Жәддә ҡалаһынан Мәккәгә тиклем һүҙыла. Мәккә-Мәҙинәлә хаж ҡылалар. Әммә оҙон ауыр юлдан, эҫелектән арыған Мөхәммәтйәр хажи тапма ауырыуы эләктереп, 75 көн Ғәрәбстанда сир һәм карантин мөҙ-

ҙәтен үткәрергә мәжбүр була. Шуға уның хаж сәфәре ярты йылға яҡынғаса һуҙыла. Ризаитдин Фәхретдин ҡазыйҙың әйтеүенсә, Мөхәммәтйәр хажи хаж ҡылыуы хаҡында ҙур ғына хажнамә лә яҙған булған, ләкин ул юлъяҙма, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, һаҡланмаған.

Мөхәммәтйәр Солтанов Диниә назаратының мосолман донъяһы алдында, Рәсәй күләмендә авторитет күтәреү буйынса байтаҡ эштәр башҡара. Назараттың үҙ эске тәртиптәрен тейешенсә юлға һала. Архив фондын, бай китапханаһын барлыҡҡа килтерә. Рәсәй мосолман төбәктәре менән танышыу өсөн Санкт-Петербург, Мәскәү, Ҡазан ҡалаларынан алып Ырымбур, Пермь, Екатеринбург, Силәбе, Омск, Төмән, Троицк ҡалаларынаса, ҡайһыларына әллә нисәшәр тапҡыр йөрөп сыға. Ахун, имамдар менән генә түгел, билдәле ғалим-ғөләмәләр менән тығыҙ бәйләнеш урынлаштыра.

Европаса уҡымышлы Мөхәммәтйәр Солтанов ислам мәҙәниәтенән дә яҡшы хәбәрҙар, милли мәҙәниәт һәм әҙәбиәткә лә бик иғтибарлы һәм ихтирамлы зат. Уның иң яҡын ярҙамсы хеҙмәттәштәре ҡазый Ризаитдин бин Фәхретдин, тәржемәсе Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев кеүек әҙип һәм ғалим кешеләр. Улар менән бер коллегалар, йыш ҡына ултырҙаш булып, дин ғилеме, фәлсәфә, мәҙәниәт, әҙәбиәт, сәнғәт хаҡында фекер алышҡандар, үҙенсә бер бәхәс-моназара ойоштороғандар.

Замандаш коллегалары шундай бер моназара мәжлесе хаҡында яҙып ҡалдырғандар. 1894 йылдың сентябрендә Өфөгә Аҡмулла килеп сыға. Уның хөрмәтенә Мөхәммәтйәр мөфти үҙ өйөндә түңәрәк кенә бер мәжлес ҡора. Уға Өфө мосолман ғалим-ғөләмәләренән байтаҡ кеше саҡырыла. Был осрашыу табындағыларҙың хәтерендә мәңгегә ҡала. «Быны Риза Фәхретдин үҙе айырыуса бер иҫтәлекле ваҡиға итеп һөйләй торғайны, — тип хәтерләй ҡарт ғалим һәм педагог Закир Шакиров. — Ғөмүмән, Риза ҡазый менән һөйләшкәндә, Аҡмулла йәки Өмөтбаев хаҡында һүҙ сыҡмай ҡалмай ине. Аҡмулланы ул башҡорттарҙың мәшһүр илгиҙәр шағиры, тип атай ине. XIX быуатта йәшәгән татар, башҡорт яҙыусыларының бөтәһенән өҫтөн ҡуя ине. Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев иһә Фәхретдинов өсөн беренсе башҡорт ғалимы, уның яҡын ҡәләмдәше... Мәжлестә Аҡмулла менән Өмөтбаев ҡара-ҡаршы ултырып шиғыр әйтешкәндәр. Сиктән тыш оҫта телле, йор һүҙле булыуы менән Аҡмулла был әйтештә һәммә кешене хайран иткән. Өмөтбаев та унан ҡалышмаҫҡа тырышҡан — үҙенең бөтә шағирлыҡ һәм сәсәнлек һәләтен эшкә ҡушҡан».

Ошо сәй, әңгәмә мәжлесендә хужа кеше Солтанов Мөхәммәтйәр мөфти «Русиәнең Пушкины вә беҙҙең Өмөтбаевыбыҙ шағирҙар» тип шиғри әңгәмәгә йән өрөп ебәрә.

Замандаштары Мөхәммәтйәр мөфтиҙең Пушкин, Лев Толстой ижады тураһында һоҡланып һөйләүҙәрен иҫкә алалар. Солтанов Өфөлә йәшәгән һәм Башҡортостанда булып киткән урыҫ яҙыусылары һәм ил өйрәнеүселәре менән дә аралашҡан. Урыҫ яҙыусыһы А.М. Федоров менән бер нисә тапҡыр осрашҡан, уның башҡорттар хаҡында яҙған «Степь сказалась» тигән романына юғары баһа биргән. Шуныһы ла иғтибарҙы биләй, был романда Солтанов мөфти үҙе бер персонаж булып ингән. Мөфти хәҙрәткә автор уҡымышлылығы, яҡшы мөғәмәлеге, донъяға киң ҡараштары хаҡында ыңғай характеристика биргән.

Бәләбәй өйәҙендә мировой судья булып эшләгәндә таныш һәм әшнә булып киткән мировой посредник Н.И. Добротворский яҙыусы ижадын да гел уҡып, күҙәтеп барған Солтанов. Уның «В глуши Башкирии» (1901) тигән китабын хуплап рецензия яҙған. Өфөлә мөфти булып эшләгән йылдарында ил өйрәнеүсе белгестәр, тарихсылар менән аралашҡан.

Яңы быуат башында йәмғиәттә башланыр ҡырҡа үҙгәрештәрҙе Сол-

танов алданыраҡ тойомлаған булһа кәрәк. Шул осорҙа уның йәнә Ырымбур, Троицк, Силәбе, Төмән ҡалаларында күренекле ғалим-ғөләмәләр, дин әһелдәре араһында йөрөп ҡайтыуы һис тиктәҫтән түгел. Шул аралашыуҙарҙа мөфтиҙең Ғәбдерәшит Ибраһимов, Әхмәт бай Хөсәйенов, Зәйнулла Рәсүлев, Йософ мырҙа Аҡсура, Фәтих Кәрими кеүек мөғтәбәр заттар менән әшнәлеге лә нығынған.

1905 йылдың башында Ырымбурҙа Хөсәйеновтар йортонда 50-60 хәлле мосолман әһелдәрҙең дин, көн, хоҡуҡ мәсьәләләре хаҡында йыйылып кәңәшләшеүҙәренә теләктәшлек менән ҡарай ул. Ысул йәдид мәктәптәрен йәйелдереүгә йөҙ менән борола. Милләттәр, диндәр тиңлеге мәсьәләһен ҡыйыуыраҡ яҡлай башлай.

Тимерҙе ҡыҙыуында һуғыу кәрәк тигәндәй, Солтанов мөфти был йүнәлештә эштәрен тиҙләтеп ебәргән. Фекерҙәштәре ярҙамында тиҙ арала мосолмандарҙың дини, донъяуи ихтыяждары хаҡында төп теләк петицияларын төҙөп, 1905 йылдың мартында Санкт-Петербургка император Николай Икенсенең үҙенә киткән. Был осорҙа Ҡазан татарҙары инициативаһы менән шулай уҡ бер петиция ойошторолоп, Рәсәй Министрҙар Кабинеты рәйесе С.В.Виттеға тапшырылған була. Ләкин ул төпкә, буҫтау аҫтына һалып ҡуйылған.

Солтанов мөфти хәҙрәттең Николай батша янына инерен белеп ҡалған бер нисә Ҡазан һәм Себер татар байы уның янына ҡунаҡханаға килгән.

Был осрашыуҙы Муса Бигиев «Ислахәт әсәсләре» (1917) тигән китабында шулай тасуирлай:

«Мөфти хәҙрәт килмеш әфәнделәрҙе асыҡ йөҙ менән ҡабул итһә лә, бер нисә минуттан һуң мәжлестең йәме ҡасты... Заһидулла бай Шәфиғулла һүҙ алып:

— Хәҙрәт! Мосолмандарҙан бер нисә әҙәм мәслихәт ҡылып, беҙҙе һеҙҙең хозурығыҙға ебәрҙеләр. Батша хәҙрәттәренә беҙҙең хәлебеҙҙе ғарыз ҡылыу (белдереү) өсөн. Илтифат мәрхәмәт ҡылып, үҙегеҙ менән беҙҙән бер ике әҙәм алып барығыҙ. Мосолмандарҙың күңелдәре тынысланһын.

Хәҙрәт, зинһар, дин ислам хөрмәтенә мосолмандарҙың үтенестәрен ҡабул ҡыла күрегеҙ! — тине.

Мөфти асыуланып:

— Батша һис кемде ҡабул итмәй. Ана, граф Виттегә барығыҙ! — ти.

Заһидулла:

— Хәҙрәт! Виттегә бик күп барҙыҡ. Файҙа булманы. Инде хәҙер һеҙҙең мәрхәмәтегеҙ менән батша хәҙрәттәренең хозурына барып, хәлебеҙҙе бер ғарыз ҡылһаҡ икән, тип өмөт ҡылабыҙ. Кисәге көн батша хәҙрәттәре рабочийҙар делегацияһын да ҡабул итте.

Мөфти:

— Мин һиңә рабочий түгел! Кит янымдан, мужик!..»

Шулай Солтанов мөфти Заһидулла байҙы яғаһынан тотоп тигәндәй ҡыуып сығара.

Янына кенәз Ғәбидулла Сыңғыҙ әфәнде килгәс, бүтән саҡырылмаған ҡунаҡтар ҙа табан ялтыратырға мәжбүр була.

Иртәгәһенә әлеге ҡунаҡтар ғәфү үтенеп килгәс, Мөхәммәтйәр мөфти: «Ярай, донъяла асыуланыш та, яраш та була, тынысланайыҡ, иртәгә үҙегеҙҙе министрға алып барырмын», — тип вәғәҙә биреп оҙата.

Солтанов мөфти үҙҙәре төҙөп килтергән петиция ҡағыҙын үҙ ҡулы менән батша хәҙрәттәренә инеп тапшыра һәм Министрҙар Кабинеты рәйесенә лә инә. Ҡабул иткән министр граф Витте уға шундай кәңәш әйтә:

— Господин мөфти, әле яҙған теләктәрегеҙҙе, ҡайтып, мосолман вәкилдәрен үҙегеҙгә йыйып, теләк-ихтыяждарығыҙҙы проект рәүешендә ҡабул итеп үҙемә тапшырығыҙ. Был ҡағиҙәсә булыр һәм хөкүмәткә өйрәнеү өсөн нигеҙ бирер.

Рәсәй Министрҙар Кабинеты рәйесе тәкдиме буйынса, Мөхәммәтйәр Солтанов 1905 йылдың 10 апрелендә Өфөлә ахун һәм имам-

дарҙан торған ҡырҡҡа яҡын вәкилде саҡырып, Диниә назаратының мәжлесен уҙғара. Уны назарат ҡоролтайы тип атайҙар.

Был ҡоролтай мәжлесен асҡанда мөфти былай ти:

«Йәмәғәт! Дини-ижтимағи әхүәлебеҙҙе ислах итмәк (реформалау), әлбиттә, йөмләбеҙҙең матлубылыр (теләге). Ошо көндәге хәлебеҙҙе төҙәтеү үҙебеҙ өсөн ни ҡәҙәр матлуб иһә, дәүләт өсөн дә, хөкүмәт өсөн дә матлуб булһа кәрәк. Төҙәтеү юлдарын, ислах рәүештәрен һәр бер халыҡ үҙе, әлбиттә, яҡшыраҡ белер. Ислах итеү тейеш хәлдәрҙе халыҡ күстәрһә (күрһәтһә), хөкүмәт, әлбиттә, мөмкин ҡәҙәр ҡабул итер.

Минең фекеремсә, ислах эштәре иң элек дини мәсьәләләрҙән башламаҡ тейештер. Мәғлүм, беләһегеҙ, дини эштәребеҙ 11-се том, 1-се ҡыҫым, 6-сы китапта яҙылған нәзым мадәләренә муафиҡ әжра ҡылынып килә. Шуға күрә дини эштәрҙе ислах итәйек тиһәк, әлбиттә, 6-сы китап мадәләрен тәкмил итеп (тулыландырып), тәғдил итеү (ғәҙел хәл итеү) тейеш булыр. Эшкә, хәҙрәттәр!» (М. Бигиев. «Ислахәт әсәсләре», 1917, 16-сы бит)

Өфөләге был дини мәжлес 10-15 апрелгәсә биш көн дауам итеп, Рәсәй хөкүмәте ҡарамағына ҡарар проекты (ләүхәһе) рәүешендә документ ҡабул итělә. Унда Рәсәй мосолмандарының дини, донъяуи, хоҡуҡи мәсьәләләре, мәктәп, мәҙрәсәләр, мәғариф, матбуғатҡа керер реформалар, рухи талаптар ентекле әйтелгән. Был хаҡта Муса Бигиевтың «Ислахәт әсәсләре» китабында: «дини, милли хәжәттәр булмаҡ үҙрә ҡабул ителмеш ҡарарҙар халыҡтың күҙенә, назарына (ҡарашына), бәлки интиҡадына (тәнҡитенә) ғарыз ҡылынмыш (беленмеш) булһалар ине, бер үҙәккә тупланмаҡ фаризәһе (тейешлеге) хосусында ғәйәт бөйөк файҙа бирер ине» тиелгән. (142-се бит).

Өфөлә ойошторолған был ҡоролтай мәжлесе ләүхәләре, айырым ҡарарҙары, уларҙың Рәсәй хөкүмәтенә, рәйесе граф Витте исеменә тапшырылыуы, Солтановтың батшаның үҙе менән күрешеп һөйләшеүе мөфтиҙең 1905 йылдан башлап ил күләмендәге йәмғиәт эштәренә әүҙем ҡушылып китеүе хаҡында һөйләй. Ул артабан либераль-буржуаз ҡарашлы мосолман әһелдәренең «Иттифаҡи мөслимин» сәйәси фирҡәһен төҙөүҙәрен хупламаған тәҡдирҙә лә Рәсәй Дәүләт думаһындағы мосолман депутаттарынан Өфө өйәҙенән Кәлимулла Хәсәнов, Шаһихәйҙәр һәм Ғәлиәскәр Сыртлановтар, Сәлимгәрәй Йәнтүрин, Ғайса Еникеев эшмәкәрлектәренә теләктәшлек белдерҙе.

Диниә назараты эргәһендә Солтанов 1907 йыл Өфөлә «Мәғлүмәт» журналына нигеҙ һалды.

Өфөлә «Ғәлиә» исемле юғары типтағы мәҙрәсәне асыуға фатихаһын биреп кенә ҡалмай, уның эшенә туранан-тура булышлыҡ итә. Мәҙрәсәгә тәүге нигеҙ ташын һалыу хоҡуғы уға бирелә.

1914 йылда Мөхәммәтйәр Солтановтың мөфти булып эшләүенә 25 йыл, ә хөкүмәт хеҙмәтенә 50 йыл тулыу уңайы менән Өфөлә Солтаниә исемендә дәрел-мөғәллим, йәғни ир балаларҙан уҡытыусылар әҙерләү институтын асыу хаҡында ҡарар сығарыла. Уставы буйынса уҡыу мөҙҙәте 6 йыл булып, дини һәм донъяуи ғилемдәр, туған тел, урыҫ һәм Көнсығыш телдәрен өйрәнеүгә иғтибар бирелә. Математика, тарих, педагогика дәрестәре лә үҙәктә тора. Был мәктәптең уставын, программаһын төҙөүҙә, уны ғәмәлгә ашырыуҙа мөфти үҙе әүҙем ҡатнаша. Ләкин оҙаҡламай Беренсе бөтә донъя һуғышы сығып китеү арҡаһында һәм киләһе йылына Мөхәммәтйәр мөфтиҙең вафат булыуы сәбәпле, был мөһим сара өҙөлөп ҡала.

Йыйып әйткәндә, XIX быуаттың урталарынан XX быуаттың ун бишенсе йылдарына тиклем Мөхәммәтйәр Солтанов мировой судья, кантон башлығы, мөфти булып эшләгән осоронда Башҡортостандағы сәйәси-ижтимағи, дини, донъяуи эшмәкәрлек өлкәһендә тарихта һиҙелерлек хеҙмәт күрһәткән ша-

хестәребеҙҙең береһе ул. Уның тормошон һәм эшмәкәрлеген ентеклерәк өйрәнәһеләр бар әле.

Шуныһын да айырым әйтергә кәрәк, Мөхәммәтйәр Солтановтың хәрби корпус йә училище тамамлаған улдары, гимназияларҙа белем алған ҡыҙҙары уҡымышлы кешеләр булып, аталарының мәғрифәтле юлын дауам иткәндәр.

«Волжский листок» гәзитендә әле 1899 йылдың 28 февраль һанында баҫылған бер мәҡәләһенән башҡортсаға әйләндереп шундай мәғлүмәтте килтереп була: «Өфө ҡалаһының уҡымышлы мосолмандарынан береһе Арыҫланғәле Мөхәмәтйәр улы Солтанов үткән йәйҙе Тула аша үткәндә Ясная Полянала атаҡлы яҙыусы граф Л.Н. Толстойҙың утарында булды. Лев Николаевич үҙе лә, уның ғаиләһе лә ҡунаҡты ғәҙәттән тыш яҡты йөҙ менән ҡаршыланы. Лев Николаевич бик алсаҡ һөйләште һәм иҫтәлек өсөн ҡунаҡҡа, үҙ ҡулы менән яҙып, философик эстәлекле өс китабын бүләк итте».

Ә мин, ошо юлдарҙың авторы, 1953 йылда Л.Н. Толстойҙың Ясная Поляна утарында булғанымда, Лев Николаевичҡа бүләк ителгән ҡомарҡылар күргәҙмәһен ҡарағанда, бик матур итеп биҙәп ағас тамырынан тотошлай юнып эшләнгән ижауға хайран иттем. Уның семәрле һабы осона ғәрәп хәрефтәрендә ырып яҙылған шундай яҙыуын уҡыным: «Хөрмәтле бөйөк мәғрифәтсе Лев Николаевич Толстойға башҡорт Арыҫланғәли Солтановтан».

Хәҙер беҙгә ошо ҡәҙерле Солтановтарҙың нәҫел-нәсәптәрен табырға ине. Иҫән-һауҙары йәки уларҙы белеүселәр «Ватандаш» редакцияһына хәбәр итһәләр икән.

## ҺЫРТЛАНЛЫ СЫРТЛАНОВТАР

Көнбайыш башҡорттарының дворяндар династияһынан хәҙер бөтөнләй онотолоп барған Сыртлановтар тоҡомо үҙ заманында бик шанлы булған аҫыл заттар. Уларҙың үҙҙәренә генә хас характерлы тормош юлдары, данлы эшмәкәрлектәре, арҙаҡлы исем-аттары бар. Улар потомственный дворяндар. Бер нисә быуыны башҡорт кантон башлыҡтары булған. Барыһы ла тиерлек уҡымышлылар. Ир-аттары йә хәрби корпус тамамлаған, йә күренекле мәҙрәсәләрҙә уҡып, указлы мулла булып киткән. Сыртлановтарҙың һуңғыраҡ быуындарынан икәүһе Рәсәй Дәүләт думаһы депутаты, көслө юристар. Түрә булғандары эре ер биләүселәр, башҡорт байҙары.

Совет власы йылдарында дворяндар эксплуататор, аҡһөйәктәр тип әҙәрләнә башлағас, Сыртланов дворяндарҙың да нәҫел-ырыу ептәре өҙөлөүгә, дөрөҫөрәге, йәшереүгә дусар ителгән, хәҙер уларҙың шәжәрәһен тергеҙеүе лә бик ауыр. Аҫаба башҡорт, тамырлы нәҫел булыуҙарына ҡарағанда, Сыртлановтарҙың үҙ иректәрен һәм ер биләмәләрен яҡлап XVII-XVIII быуаттарҙағы башҡорт восстаниеларында ҡатнашыуҙарына һис бер шик юҡ. 1773—1775 йылдарҙағы ихтилалда улар үҙ яҡтарында хәрәкәт иткән Ҡаранай Моратов атлылары сафында ҡатнашҡан булырға тейеш. 1812 йылғы Ватан һуғышында, 1813—1815 йылдарҙа Көнбайыш Европаға походтарҙа Сыртлановтарҙан бер нисә ир-ат яу йөрөп иҫән ҡайтҡан.

1798 йылдан Башҡортостанда кантонлыҡ осоро башланғас, Сыртлановтар үҙ төбәктәрендә, элекке Бәләбәй өйәҙендә башта 9-сы, унан 10-сы, 1807 йылдан 12-се башҡорт кантонының башлыҡтары булған. Улар фамилияһы тыуған Шланлыкүл ауылының халыҡ иҫәбен алыуҙың дөйөм исемлегенә индерелмәүе лә быны раҫлай. Тик әлегә тәүге кантондың формуляр кенәгәһе табылмаған.

Башҡорт ауылдарының кантондарға, волостарға һәм ауыл йәмғиәттәренә бүленгән 1798—1865 йылдарҙағы исемлегендә Сыртлановтар йәшәгән Шланлыкүл ауылы башта 9-сы башҡорт кантоны Өстүбә ауыл йәмғиәтенә ҡараған. Ауылда йәмғеһе 207 йән кеше иҫәпләнгән.

Сыртлановтарҙан тәүге кантондар Сыртланов Сиражетдиндың атаһы һәм үҙе булырға тейеш. 1820,

1834 йылдарҙағы халыҡ иҫәбен алыу кенәгәләрендә уларҙың ғаиләләре теркәлгән.

1859 йылғы 10-сы ревизия, халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәре генә Сыртлановтарҙан бер ғаилә ялғатылып та уның ишле ғаилә тармағы икәнен күрергә ярҙам итә (мәғлүмәттәрҙе урыҫсанан башҡортсаға әйләндереп бер ни тиклем йыйнаҡлап бирәбеҙ):

«10-сы ревизия яҙмалары. 1859. Бәләбәй өйәҙе, 21-се башҡорт кантоны, 1-се йорт, Шланлыкүл ауылы.

1. Сиражетдин Шаһиәхмәт улы Сыртлановтың улдары: Шаһимөхәммәт, 14 йәш; Ямалетдин, 6 йәш.

Ҡыҙҙары: Фәрхизада, 10 йәш, Фатима, 5 йәш, Йәнзәһрә, 2 йәш.

Сиражетдиндың әнеләре: Арыҫланғәле, 16 йәш, Хужағәле, 9 йәш.

Сиражетдиндең ике туған ағалары:

Беренсе ике туған ағаһы Шаһимардан Ишбулды улы Сыртланов, 56 йәштә, указлы мулла. Ҡатыны Хәбибъямал Ғәбделнасир ҡыҙы, 35 йәштә.

Шаһимардандың беренсе ҡатынынан улы Имаметдин Сыртланов, 35 йәш, указлы мулла. Ҡатыны Мәғрифә Ғабдулла ҡыҙы, 29 йәш.

Имаметдиндең улы Низаметдин, 10 йәш. Ҡыҙҙары Бибисара, 6 йәш, Бибимәрйәм, 3 йәш.

Шаһимардандың икенсе улы Тәүхетдин Сыртланов, 23 йәш.

Сиражетдиндың икенсе ике туған ағаһы Шаһигардан Ишбулды улы Сыртланов, 55 йәш, кантон башлығы.

Ҡатыны Сәрбифәхриямал, 39 йәш...

Беренсе ҡатынынан улдары: Арыҫланбәк, 29 йәш, кантон башлығы ярҙамсыһы; Йыһангир, 27 йәш, указлы мулла; Шаһисолтан, 25 йәш, хорунжий.

Икенсе ҡатынынан улдары: Шаһигәрәй, 18 йәш, Шаһихәйдәр, 14 йәш, Шаһимөхәммәт (1851 йыл вафат), Мөхәммәтшәриф, 3 йәш ярым.

Ҡыҙҙары: Ғәйшә, 11 йәш, Мәрйәм, 1 йәш.

Сиражетдиндең өсөнсө ике туған ағаһы Ғимадетдин Ишбулды улы Сыртланов, 54 йәштә, указлы мулла.

Ҡатыны Сәғәдәтбаныу Мәүлит ҡыҙы, 52 йәштә.

Сиражетдиндең дүртенсе ике туған ағаһы Шиһабетдин Ишбулды улы Сыртланов. 41 йәштә, урядник.

Ҡатындары: Бибиғәйшә Әсән ҡыҙы, 49 йәштә; Фәрхинур Әсфәндиәр ҡыҙы, 20 йәштә.

Кантон начальнигы есаул
Сыртланов (ҡултамғаһы)».

Сыртлановтарҙың дөйөм бер ғаилә эсенә йыйып теркәлгән бик ишле ғаилә тармағы был. Ир-аттарының күбеһе ҙур исем-дәрәжәле: кантон башлығы, кантон башлығы ярҙамсыһы, указлы мулла, хорунжий, урядник һ.б.

Шуларҙан формуляр исемлек кенәгәләре һаҡланған ике кантон башлығына туҡталайыҡ.

**Шаһигардан Сыртланов.** Кантон ярҙамсыһы Ишбулдының икенсе улы. Башҡорттарҙың хәрби сословиеһына хас хәрби хеҙмәт юлын үтә. Йәше етеү менән 12-се башҡорт кантоны ҡарамағындағы казак сифатында 1821 йыл хеҙмәткә алына. Алты йыл хеҙмәтенән һуң 1828 йылдың ғинуарында урядник итеп үрләтелә. 1835 йыл — хорунжий, 1839 йыл — сотник, 1842 йыл есаул чиндары бирелә. Ғәскәр старшинаһы (войсковой старшина) итеп тәғәйенләнә.

1835 йылдың февраленән 21-се башҡорт кантоны башлығы вазифаһын башҡара башлай. 1837 йылда кантон башлығы итеп рәсми рәүештә раҫлана. 1856 йылда ул икенсе срокка раҫлана.

Хәрби хеҙмәттәре өсөн 1853—1856 йылдарҙағы һуғыш иҫтәлегенә Владимир таҫмаһына бронза миҙал менән бүләкләнә. Хәрби походтарҙа ҡатнашҡаны өсөн Башҡорт ғәскәре (Войско Башкирское) командующийынан бер нисә тапҡыр рәсми рәхмәттәр ала, ғәскәр старшинаһы исеме бирелә.

Кантон начальнигы булып эшләүенең тәүге осорҙарында ҡул аҫтындағыларҙы ҡыйырһытҡаны, ҡаты ҡуллылығы өсөн күп ялыуҙар килеү арҡаһында 1848 йыл хәрби суд хөкөмөнә лә тарттырыла, әммә ил-йорт алдында күрһәткән күп хеҙ-

мәттәре өсөн аҡлана һәм үҙ кантонлыҡ урынында ҡалдырыла.

Шаһигардан Сыртланов, формулярҙа күрһәтелеүенсә, урыҫса һәм төркисә грамоталы, хәрби әҙерлекле кеше.

Кантондың эш урыны булып тыуған Шланлыкүл ауылы иҫәпләнә. Үҙ ҡуш йорто бар. Һыу тирмәне тора. Формулярҙа йәнә ат заводы бар тип яҙылған. Кантон башлығы, күрәһең, тоҡомло аттар үрсетеп, күп бейәләр аҫырап ҡымыҙ яһатыу һөнәре менән дә шөғөлләнгән. Йөҙәрләгән дисәтинә көтөү, бесән, иген ер-баҫыуҙарына эйә булған.

1861 йыл башына Шаһигардан Солтанов кантондың ғаилә хәле:

Ҡатыны Сәрбифәхриямал, Мутин хорунжий ҡыҙы.

Улдары: Арыҫланбәк, 1838 йылғы, зауряд-хорунжий, кантон атаһының ярҙамсыһы.

Йыһангир, 1832 йылғы, үҙ кантондарында указлы мулла.

Шаһисолтан, 1834 йылғы, сотник, 20-се башҡорт кантоны башлығы.

Шаһигәрәй, 1843 йылғы, мәҙрәсәлә уҡыған.

Шаһихәйҙәр, 1846 йылғы, Ырымбур хәрби корпусында уҡый (киләсәктә Рәсәй Дәүләт думаһы депутаты булып танылыр зат).

Ҡыҙҙары: Ғәйшә, 1848 йылғы, Мәрйәм, 1858 йылғы. Әле ата-әсәһе ҡарамағындалар.

**Шаһисолтан Сыртланов.** Шаһигардан кантондың өсөнсө улы. Атаһы был улын баштан уҡ Ырымбур кадет корпусына уҡырға илтә. Шаһисолтан унда алты йыл уҡып, хорунжий чинында тамамлағас, 1855 йыл 21 йәшендә Башҡорт ғәскәрендә хеҙмәт итә башлай. Бер нисә хәрби походта ҡатнаша. 1858 йылда отряд командиры булып Ырымбур корпусы командаһын Урал аръяғы далаларына походында һаҡлап барыша. Шул уҡ йылды ҡаҙаҡ далаларынан Ҡараҡом сүлдәренә тиклем оҙон хәрби поход юлдарын урап ҡайта. Арал диңгеҙе буйы фордтарында, Һыр-Дарья буйы крепостарында була. Походтағы тырышлыҡ һәм ҡыйыулыҡтары өсөн сотник чиндары бирелә. 1853—1856 йылдарҙағы һуғыш иҫтәлеге булған бронза миҙал менән бүләкләнә.

1861 йылда инде 23-сө башҡорт кантонының кантон начальнигы итеп үрләтелә. Ошо йылды уҡ Шаһисолтанға потомственный дворян исеме бирелә.

Шаһисолтан Сыртланов 16-сы башҡорт кантоны сотнигы Мөхәммәтгәрәй Ҡайбышовтың ҡыҙына өйләнә.

Ер биләмәләре Бәләбәй өйәҙендә, йорттары Шланлыкүл ауылында. Атаһы менән берлектә һыу тирмәне, ат заводы тота.

Шаһисолтан Сыртланов кантон уҡымышлылығы, тырышлыҡтары менән губернатор, өйәҙ түрәләре, кантондар араһында ҙур абруй яулай.

**Арыҫланбәк Сыртланов.** Шаһигардан кантондың беренсе ҡатынынан оло улы. Ул да хәрби сословиеларына яҙылған яҙмышты, ата-бабалары, ағалары юлын ҡыуған. Арыҫланбәк 1848 йылда казак сифатында 12-се, унан 13-сө башҡорт кантонлығына хеҙмәткә ингән. 1850 йылда уға урядник, 1852 йылда зауряд-хорунжий, 1857 йылда зауряд-сотник чиндары бирелгән. Унан ул үҙгәртелгән 21-се башҡорт кантонының кантон ярҙамсыһы итеп тәғәйенләнгән. Ил-йорт, хөкүмәт алдында күрһәткән тырыш хеҙмәттәре өсөн 1853—1856 йылдарҙағы һуғыш иҫтәлеге миҙалы менән бүләкләнгән. 1865 йылда кантонлыҡ системаһы бөтөрөлгәс, волость, өйәҙ күләмендәге граждандыҡ хеҙмәтенә күскән буғай. Уның артабанғы эше, хеҙмәт юлдары тураһында аныҡ ҡына мәғлүмәттәр юҡ.

Шуны айырып әйтергә кәрәк, башҡорт, мишәр хәрби сословиеларының XIX быуаттың алтмышынсы йылдары уртаһынан граждандыҡ хәленә күсереү реформаһы был халыҡтарҙың эш-шөғөлдәренә, түрәләренең карьераһына киҫкен генә үҙгәрештәр индерә. Хәрби сословиенан граждандыҡҡа ҡайтыуҙың аҙаҡ күп ыңғай яҡтары менән бергә

тәүҙә байтаҡ ауырлыҡтары, икенсе шартҡа күнеп китеүҙең үҙ ҡаршылыҡтары килеп тыуа. Уларҙы һөнәрҙәрҙе үҙгәртергә, яңы реформаларға яйлашырға, эҙләнергә мәжбүр итә. Әҙме-күпме ере бар халыҡ иген, урман, малсылыҡ эшенә ныҡлабыраҡ тотона. Ерһеҙе байыраҡтарға хеҙмәтсе булып яллана, йә эш, бәхет эҙләп ситкә сығып китә. Сауҙа, төрлө һөнәр, кәсеп эштәре йәнләнә төшә. Кантондарға, бүтән оло түрәләргә, чинлы хәрбиҙәргә эш урындарын, шөғөлдәрен алыштырырға тура килә.

Заман башҡа — заң башҡа, ҡанун башҡа — көн башҡа, ти мәҡәл. Ана шундай боролошло заманда Сыртлановтар династияһы ла үҙ шөғөлөн һәм ориентацияһын үҙгәртергә мәжбүр. Эре ер биләгәндәренең бәғзеләре ер эше менән шөғөлләнер баярға әйләнә. Күптәре ниндәйҙер яңы һөнәрҙәрҙе үҙләштерә. Олораҡ түрәләре өйәҙ түрәләре булып китә. Йәшерәктәре университет, техник училищелар тамамлап, юрист, инженер, врач, уҡытыусы һ.б. һөнәр эйәләре, уҡымышлылар булып танылa.

1870 йылғы мәғлүмәттәргә ҡарағанда, реформалар осоронда Шланлыкүл ауылының күпкә ҙурайғаны күренә. Халҡы ете йөҙҙән ашып киткән. Ауыл ике мәхәлләгә бүленгән. Ике мәсете, бер мәҙрәсәһе бар. Ҡыҙашта һыу тирмәне эшләй. 1926 йылда халыҡ иҫәбен алыу кенәгәһендә Шланлыкүлдә йәшәгәндәр һаны икеләтә артып киткәне, 1400 йәнгә еткәне теркәлгән. Ауылда 267 йорт, 230 хужалыҡ берәмеге бар.

Ә XX быуат башында, 1907—1910 йылдарҙағы Столыпин реформаһы осоронда Шланлыкүлдән Сыртлановтар ғаиләләренең күпселеге, атап әйткәндә, 48 ғаилә Сәрмәсән йылғаһы буйына утарға күсеп сыҡҡан. Аҙаҡ уларҙан шау Сыртлановтарҙан ойошҡан Сыртлан ауылы барлыҡҡа килгән.

Шул Сыртлановтар династияһынан XX быуат башында ҙур дан алған ике шәхес менән таныштырайыҡ. Улар — Рәсәй Дәүләт думаһы депутаттары аталы-уллы Сыртлановтар. Атаһы Шаһихәйҙәр Сыртланов, улы Ғәлиәскәр Сыртланов.

**Шаһихәйҙәр Сыртланов.** Ул Шаһисолтан кантондың икенсе ҡатынынан тыуған уртансы улы. Тыуған йылы 1847 йыл, Шланлыкүл ауылы. Ырымбурҙа кадет корпусында алты йыл уҡыған. Унан һуң туғыҙ йыл Төркөстанда хәрби хеҙмәт юлын уҙған. Сәмәрҡәнд ҡалаһында хәрби-халыҡ идараһының бүлек начальнигы булып эшләгән.

Капитан чинында отставкаға сыҡҡас, тыуған иленә әйләнеп ҡайтҡан. Бәләбәй өйәҙендә мировой посредник итеп тәғәйенләнгән. Крәҫтиән эштәре буйынса ағза булараҡ яуаплы вазифалар башҡарған. 1877 йылдан Бәләбәй өйәҙенең һәм Өфө губерна земствоһының гласный һәм мировой судьяһы булған. Ике тапҡыр өсәр йыл губерна земский управаһының ағзаһы, бер тапҡыр өйәҙ управаһының ағзаһы булып хеҙмәт иткән.

Шаһихәйҙәр Сыртланов, күренекле башҡорт дворяндарының береһе булараҡ, губерна дворяндары ҡаршыһында ҙур абруй ҡаҙанып, Өфө губернаһы дворяндарынан Рәсәй дәүләт дворянлығының Һамар бүлегенә вәкил итеп һайланған.

1905—1907 йылдарҙағы революция осоронда Ш. Сыртлановтың рәсми вазифаларынан тыш йәмәғәт эшмәкәрлеге лә бик әүҙемләшеп киткән.

Рәсәй мосолмандары араһында дини, милли, рухи ирек өсөн көрәш ҡыҙған саҡта ул «Иттифаҡи әл-мөслөмин» тигән мосолман либераль ойошмаһын төҙөү эшендә туранантура ҡатнаша, уның программаһын яҙыша. Унда Рәсәй мосолмандарының хоҡуғы, экстерриториаль автономияһы, батша самодержавиеһы власын конституцион сикләү, халыҡтың гражданлыҡ ирке, һүҙ ирке мәсьәләләре үҙәккә ҡуйыла. Был программа Рәсәй мосолмандарының 1905 йылғы өсөнсө ҡоролтайында ҡабул ителә. Ш. Сыртланов өс ҡоролтайҙа ла ҡатнаша, иттифаҡтың үҙәк комитеты ағзаһы итеп һайлана.

Шул уҡ йылды Рәсәй Дәүләт думаһы төҙөү иғлан ителгәс һәм киләһе йылына депутаттар һайлау башланғас, Өфө губернаһы мосолмандары араһынан Шаһихәйҙәр Сыртланов Беренсе һәм Икенсе



*Шаһихәйҙәр Сыртланов*

Думаға рәттән ике тапҡыр депутат булып үтә.

Беренсе Дәүләт думаһының тәүге ултырыштарынан уҡ Сыртланов аграр мәсьәләләрҙе, башҡорт халҡының хоҡуҡтарын яҡлап ҡыйыу сығыштар яһай. Бына Думаның стенограммаһынан бер өҙөк:

«Господа! Я представитель Уфимской губернии, выбранный тамошними коренными жителями, башкирами. Я желаю сказать коечто из того, чем этот народ обижен в разное время бывшим правительством. Башкиры приняли подданство России 400 с лишним лет тому назад, — это не завоеванный народ. При принятии их в подданство им было обещано, что не тронут ни земли их, ни имущества, ни религии, ни обычаев, ни быта... Со временем башкир обратили в казачье войско — они участвовали в отечественных войнах и оказали известные заслуги, а затем из казачьего войска, хотя они и числились казаками, башкир вызывали на службу не как кавалеристов, а в виде рабочих с подводами и, как бы в наказание, заставляли их вести каторжный труд. Их трудами выстроили Оренбургскую крепость, а затем срыли ее и все степные крепости до и на самой Сыр-Дарье. Их заставляли возить их собственный лес в казну, сплавлять этот лес по Самаре и Уралу и возить на верблюдах и лошадях в степные города за 1000 и больше верст, и за все это башкирам платили 3 копейки в день на содержание с лошадью, вследствие этого много лошадей у башкир погибали от голода... Но все-таки еще можно было терпеть до тех пор, пока не начались хищения башкирских земель...»

Думаның юғары трибунаһынан яңғыраған бындай телмәрҙә башҡорттарҙы батша Рәсәйенең элек-электән, шулай уҡ кантонлыҡ осоронда нисек иҙеүенә, кабала хәленә төшөүенә ҡаршы протестың аһтарын ишетергә мөмкин дворян аҫаба башҡорт депутаты ауыҙынан.

Ошо уҡ трибунанан Ш. Сыртланов башҡорт ерҙәрен тартып алыуға, талауға ҡаршы протест менән тағы бер нисә тапҡыр сығыш яһай, халыҡтарҙың тиң хоҡуҡлылығы, аграр мәсьәләләр буйынса ғәҙел тәҡдимдәр индерә. Ләкин үҙе бер телмәрендә әйткәнсә, Дания короленә үтенес, ялыуҙар нисек барып етмәгән анекдоттағылай, Николай II батшаға ла депутаттар теләге һәм тәҡдиме етмәүенә үкенесен белдереүҙән башҡа сара ҡалмай.

Аҙаҡ Рәсәй Дәүләт думаһында мосолман депутаттары парламентта үҙ фракцияһын төҙөүгә өлгәшә һәм уның менән етәкселек Сыртлановҡа тапшырыла.

Әммә ләкин Беренсе Дәүләт думаһының ғүмере оҙаҡ булмай. Батша хөкүмәтенә, батшаның үҙенә күп тел тейҙереү арҡаһында Николай II тарафынан Дума ҡыуыла. Быға ҡаршы протест менән ҙур төркөм депутаттар Выборг ҡалаһына барып сығыш яһауҙары өсөн уларҙың күпселеге ҡулға алынып хөкөмгә тарттырыла. Бына һиңә депутат тейелмәҫлеге, хаҡлыҡты яҡлау аҙағы!

Әйткәнебеҙсә, Икенсе Дәүләт думаһына ла яңынан депутат булып һайлана Шаһихәйҙәр Сыртланов. Әүәлге ҡуйылған хоҡуҡ, ер мәсьәләләрен даулашыуҙы дауам итә. Аграр комиссияла эшләй.

Билдәле, дворян, аҫаба башҡорт булараҡ, Ш.Сыртланов күп ер хужаһы, алпауыт. Уның ер биләмәһе 2200 дисәтинәне тәшкил итә. Әммә уға үҙ хәстәренә ҡарағанда ил-йорт ҡайғыһы мөһимерәк. Депутат бурысы шундай.

**Ғәлиәскәр Сыртланов.** Шаһихәйҙәр депутаттың улы. Ул 1875 йылда тыуған. Яңы заманда йәшәһә лә, ул да күберәк атаһы юлын ҡыуған.

Әммә унын заманы, ориентиры һәм һөнәре башҡа. Рәсәйҙә капиталистик йәмғиәт нығына барған дәүер. Йәштәрҙең ынтылышы Европаса белем алыуҙа, Көнбайыш цивилизацияһына төбәлештә.

Ғәлиәскәр, күрәһең, атаһы кәңәше менән, Петербург кадет хәрби училищеһында уҡыған, унан Александр исемендәге Хәрби-юридик академияны миҙал менән уңышлы тамамлаған. Ошонда уҡ ҡалып, Литва лейб-гвардия полкында һәм хәрби-суд ведомствоһында офицер булып хеҙмәт иткән. Санкт-Петербург хәрби судында баш адвокат вазифаһын башҡарған. Шул осорҙа Ғәлиәскәр Сыртлановтың баш адвокат булып, рус-япон һуғышында армия һәм флоттың еңелеүе һәм Порт-Артур ҡалаһын дошманға ҡалдырғандары өсөн ғәйепләнгән адмирал Н.И.Небогатовты, вице-адмирал А.М.Стессельде ҡыйыу һәм юғары профессиональ кимәлдә яҡлауы тарихта яҡшы билдәле.

1906 йылдың аҙағында Ғ. Сыртланов хәрби суд ведомствоһынан запастағы капитан чинында отставкаға сыға һәм ҡалған ғүмерен Санкт-Петербург адвокатураһында эшләй. Ғәҙел һәм иң компетентлы, ҡыйыу, абруйлы адвокаттарҙан һанала.

Тыуған яғы Шланлыкүлдә 350 дисәтинә ере бар, эре ер хужаһы булараҡ Бәләбәй өйәҙендә һайлаусылар (выборщик) советы ағзаһы булып тора.

Бәләбәй өйәҙенән Өсөнсө Дәүләт думаһына депутат итеп һайлана. 1907—1912 йылдарҙа Думаның йәнә мосолман фракцияһы ағзаһы. Думаның финанс, күскенселәр эше, шәхес хоҡуғы комиссияларында эшләй.

Ғәлиәскәр Сыртланов мосолман депутаттары араһында заманса уҡымышлы, тәжрибәле юрист-адвокат, яңы генерация вәкиле булараҡ айырылып тора. 1907 йылдың 17 ноябрендә Рәсәй Министрҙар советы председателе П.А. Столыпиндың Думалағы төп докладын тикшергәндә Ғ.Ш. Сыртланов 20 миллион Рәсәй мосолмандарына ҡарата хөкүмәт дискриминацион сәйәсәт тотоуын, һайлау хоҡуҡтарының сикләнгәнлеген ҡаты тәнҡит итә һәм дини, милли, социаль тиң хоҡуҡлылыҡ принциптарын яҡлап сыға.

Депутатлыҡ һәм юридик эшмәкәрлеге киң йәйелдерелгән осоронда ғына Ғәлиәскәр Сыртланов 1912 йылдың йәйендә Петербургта сәйер шарттарҙа һәләк була.

Совет власы йылдарында элекке дворяндар тоҡомдарын эҙәрлекләүҙәр арҡаһында Сыртлановтар династияһы һүнеберәк ҡала. Күптәре аҫаба аҫыл зат нәҫел-нәсәбен йәшерергә, фамилияларын алыштырырға мәжбүр. Элекке данлы ата-бабаларының исеме, эшмәкәрлектәре онотторолоуға дусар ителә.

Шулай ҙа, ниндәй ауырлыҡтар тыумаһын, был осорҙа күтәрелеп сыҡҡан ике данлы исем-фамилияны атарға кәрәк. Уларҙың береһе — Рим Сыртланов, икенсеһе — Ампир Сыртланов.

**Рим Сыртланов.** Рим Солтан улы — унын сәхнә псевдонимы. Үҙ исеме Рәхимйән, атаһыныҡы Солтангәрәй.

Рим Сыртланов 1908 йылда Өфө губернаһы Бәләбәй өйәҙе Сыртлан ауылында тыуған. Ауыл мәҙрәсәһендә, мәктәптә уҡыған. 1930 йыл Өфөлә Башҡорт сәнғәт техникумының театр бүлексәһен тамамлаған. 1928 йылдан 1972 йыл пенсияға сыҡҡансы Башҡорт дәүләт академия драма театрында эшләй. Сәхнәлә 200-ҙән ашыу ролдәрҙә уйнаған. Башҡорт АССР-ының халыҡ артисы, РСФСР-ҙың, БАССР-ҙың атҡаҙанған артисы. Башҡорт театр сәнғәтен үҫтереүҙә роле ғәйәт ҙур.

**Ампир Сыртланов.** Атҡаҙанған нефтсе. 1936 йылда Бүздәк районы Сыртлан ауылында тыуған. Өфө нефть институтын (хәҙер Өфө нефть техник университеты) тамамлаған. «Саҡмағошнефть» идаралығында эшләгән. «Башнефть»тә баш инженер, генераль директор вазифаларын башҡарған. Техник фәндәр кандидаты, Рәсәй Федерацияһы Инженерҙар академияһы академигы. Рәсәй Федерацияһының һәм Башҡорто-

стан Республикаһының атҡаҙанған нефтсеһе. Күп кенә ордендар кавалеры.

Советтар Союзы геройы летчик **Мәғүбә Сыртланова** шулай уҡ Сыртлановтар династияһына ҡарай. Ул уларҙың батыр бер килене.

Нәҫел нәҫелгә, ҡан ҡанға тартыр, ти халыҡ юрамы. Документтарҙа Сыртлановтарҙың фамилияһы Ырымбур губернаһында XVIII быуаттарҙа күренә. Шланлыкүл ауылының ҡасан нигеҙләнеүе әлегә мәғлүм түгел. Алда әйткәнебеҙсә, 1798 йылдан алынған башҡорт ауылдары исемлегендә Шланлыкүл 207 кеше йәшәгән бер ауыл. 1870 йылғы исемлектә ике йөҙләп йортло, мең ярым кешеле ҙур ауыл. 1917 йылғы халыҡ иҫәбен алыу кенәгәләрендә Шланлыкүл ауылының тағы икеләтә ҙурайғанлығы күренә. Өҫтәүенә, унан Сыртлан тигән ауыл айырылып сыҡҡан Сәрмәсән йылғаһы буйына. Унда 48 йорт хужалыҡ. Күрәһең, Сыртлан ауылы XX быуат башындағы Столыпин реформалары ваҡытында бүленеп ултырған. Ул ауыл шуныһы менән характерлы, унда фәҡәт Сыртлановтар ғаиләләре айырылып сыҡҡан. Ауыл шау Сыртланов фамилияларынан тора.

Сыртлановтарҙың артабанғы нәҫел ептәрен табыу һәм Сыртлан ауылының ер биләү күләмен һәм мөлкәт-мал кимәлен билдәләү өсөн уның 1917 йылғы Бөтә Рәсәй перепись — ауыл хужалығын иҫәпкә алыу яҙмаларын килтереүҙе кәрәк һанайбыҙ:

*Өфө губернаһы, Бәләбәй өйәҙе, Боғады волосы, Сыртлан ауылы. 1917, июль.* (Материалдарҙы башҡортсаға әйләндереп бирәбеҙ).

1. Сыртланов Арыҫлангәрәй Фәйрухша улы, 35 йәш. 19 баш малы, 7 дисәтинә ере бар.
2. Сыртланов Фәсхетдин Фәйрухша улы, 75 йәш. 23 баш мал (3 ат, 1 тай, 3 һыйыр, 12 һарыҡ, 4 кәзә), 35 дисәтинә ер.
3. Сыртланов Сәйет Гәрәйсәхип улы, 40 йәш. Малы 9 баш.
4. Сыртланов Ғилван Мөхәммәтғәрип улы, 45 йәш, 15 баш мал (4 аты, 2 һыйыры).
5. Сыртланов Нуршәйед Мөхәммәт улы, 78 йәш. 23 баш мал, 9 дисәтинә ер.
6. Сыртланов Ғәделша Фәйрухша улы, 72 йәш. 48 баш мал (5 ат, 4 һыйыр, 25 ваҡ мал), 32 дисәтинә ер.
7. Сыртланов Ишмөхәммәт Шәймөхәммәт улы, 13 баш мал, 9 дисәтинә ер.
8. Сыртланов Х-Ҡадир Ишмөхәммәт улы, 71 йәш. 13 баш мал, 12 дисәтинә ер.
9. Сыртланов Ризван Мөхәммәтғариф улы, 48 йәш. 22 баш мал (6 баш йылҡы, 2 баш һыйыр, ваҡ мал), 14 дисәтинә ер.
10. Сыртланов Фәтхулла Сәхибгәрәй улы, 47 йәш. 12 баш мал, 32 дисәтинә ер.
11. Сыртланов Солтангәрәй Батыргәрәй улы, 38 йәш. 13 баш мал (4 ат, 2 һыйыр, 7 баш ваҡ мал), умарталары, 12 дисәтинә ере. (Өс улы бар. Солтангәрәй артист Рим Сыртлановтың атаһы).
12. Сыртланов Арыҫлангәрәй Миргәрәй (?) улы, 47 йәштә. 4 улы, 4 ҡыҙы бар. 25 баш мал аҫырай, 32 дисәтинә ер биләй.
13. Сыртланов Мөхәммәтша Фәйрухша улы, 52 йәш. 2 улы, 2 ҡыҙы, 7 баш малы бар.
14. Сыртланов Шәүәли Ирнадар улы, 30 йәш. 10 баш малы, 6 дисәтинә ере.
15. Сыртланов Миңлеғази, 21 йәш. 12 баш мал, 5 дисәтинә ер.
16. Сыртланов Шаһийән Әхмәтйән улы, 50 йәш. 2 улы, 2 ҡыҙы бар. 23 баш мал (5 ат, 3 һыйыр, 18 ваҡ мал), 19 дисәтинә ер.
17. Сыртланов Хажтажи Сәлиғәскәр улы, 36 йәш. 2 улы, 2 ҡыҙы бар. 11 баш малы, 7 дисәтинә ере.
18. Сыртланов Әхмәтйән Шәйәхмәт улы, 26 йәш, 2 ул, 2 ҡыҙ. 21 баш мал, 13 дисәтинә ер.
19. Сыртланов Лотфорахман Фазлирахман улы, 45 йәш. 2 улы, 1 ҡыҙы бар. 15 баш мал, 9 дисәтинә ер.
20. Сыртланов Дәүләтша Ғәҙелша улы, 40 йәш. 2 ул, 4 ҡыҙ. 28 баш мал (4 ат, 2 һыйыр, 16 ваҡ мал), ере 9 дисәтинә.
21. Сыртланов Мөхәррәм Сәйетбаттал улы, 39 йәш. 1 ҡыҙы бар. 20 баш мал, 9 дисәтинә ер.

22. Сыртланов Шайшафик Әхмәтйән улы, 49 йәш. 4 уллы. 20 баш мал, 10 дисәтинә ер.

23. Сыртланов Миңлеғәделша Мөхәммәтғарип улы, 47 йәш. 2 улы бар. 23 баш малы, 11 дисәтинә ере.

24. Сыртланов Сәйетгәрәй (?) Мөхәммәтгәрәй улы, 52 йәш. 1 улы бар. 33 баш мал, 52 дисәтинә ер.

25. Сыртланов Солтанша Муллағол улы, 35 йәш. 18 баш малы, 10 дисәтинә ере.

26. Сыртланов Хәсмә (?) Сәрмәндар улы, 41 йәш. 1 ул, 1 хеҙмәтсе. 18 баш мал, 7 дисәтинә ер.

27. Сыртланов Әбелмәхиә Фазлирахман улы, 48 йәш. 4 ҡыҙы, 1 хеҙмәтсеһе бар. 20 баш мал, 11 дисәтинә ер.

28. Сыртланов Ғәрифулла Мөхәммәди улы, 38 йәш. 2 ул, 3 ҡыҙ. 20 баш мал.

29. Сыртланов Шәйхәйдәр Шайморат (?) улы, 38 йәш. 1 хеҙмәтсе, 24 баш мал.

30. Сыртланов Мөхәммәтдин Шәрәфетдин улы, 36 йәш. 1 улы, 1 ҡыҙы, 1 хеҙмәтсеһе бар. Малы 12 баш, ере 22 дисәтинә.

31. Сыртланов Мөгимән Ишбулды (?) улы, 78 йәш. 1 улы, 2 хеҙмәтсеһе бар. 30 баш малы, 32 дисәтинә ере.

32. Сыртланов Фәтхелбай Шәйәхмәт улы, 25 йәш. 2 хеҙмәтсе тота. 21 баш малы, умарталығы, 47 дисәтинә ере.

33. Сыртланов Һидиәтулла Мөхәммәтйән улы, 33 йәш. 4 улы бар. 2 хеҙмәтсе, 30 баш мал, 20 дисәтинә ер.

34. Сыртланов Мөхәммәтйәр (?) Хәким улы, 55 йәш.

35. Сыртланов Мөхәммәтгәрәй Сәйед (?) улы, 76 йәш. 2 улы, 3 ейәне, 2 килене бар. 35 баш малы, 32 дисәтинә самаһы ере.

36. Сыртланов Әхмәтша Әсфәндиәр улы, 77 йәш. 1 ул, 2 килен, 1 хеҙмәтсе, 28 баш мал, 32 дисәтинә ер.

37. Сыртланов Ризван, 45 йәштә.

38. Сыртланов Төхфәтулла, 48 йәштә. Ярлы.

39. Сыртланов Байназар Ирнадар улы, 37 йәштә. 2 улы, 5 баш малы бар.

40. Сыртланов Мөхәммәтгәрәй Батыргәрәй улы, 24 йәштә. Ярлы.

41. Сыртланов Бәдехшан Фәйрухша улы, 48 йәш. 2 ул, 1 ҡыҙ. 7 баш мал.

42. Сыртланов Ғәбденасир (?) Сәлимнасир улы, 36 йәштә. 2 ул, 1 ҡыҙ. 18 баш мал.

43. Сыртланов Хәйдәрша Ишмөхәммәтғәли улы, 58 йәштә. 2 улы, 2 ҡыҙы бар. 5 баш малы.

44. Сыртланов Мирғазим Ирнадар улы, 58 йәштә. 5 улы, 2 ҡыҙы бар. Малдары 5 баш.

45. Сыртланов Гәрәйша Фәйрухша улы, 46 йәш. 6 баш малы.

46. Сыртланов Баһуманша Әхмәтйән улы, 40 йәш. 2 ул, 2 ҡыҙ.

47. Сыртланов Нәби Әхмәтша улы.

48. Сыртланов Вилдан Мөхәммәтғариф улы.

Сыртлан ауылының 1917 йылдың йәйендә үткән был ауыл хужалығы переписы материалдары буйынса шундайыраҡ күҙәтеү һәм һығымталар яһарға мөмкин:

Беренсенән, бер нәҫел-ырыу ғаиләләренең бары бер фамилиянан ғибәрәт уртаса ҙурлыҡтағы ауыл ҡороп ултырыуҙары бик һирәк, уникаль күренеш.

Икенсенән, бер династияның шулай бер төптән шундай ауыл ҡороуҙың үҙ ыңғай яҡтары күп: бер маҡсат менән эш итеү, ер-һыу биләмәләрен уртаҡ күреп тигеҙ бүлешеү, үҙ-ара ярҙамлашып уртаҡ хеҙмәттәшлекте нығытыу. Дөйөм йәмғиәттән (Шланлыкүл ауылынан) үҙҙәренә тейешлеһен бүлеп алыу, династия принцибында беркетеү (бар ғаиләләр ҙә аҫаба башҡорттар).

Яңы урында үтә байҙар йәки үтә ярлылар бигүк айырылып тормай. Етеш тормошло урта хәлләләр абсолют күселекте тәшкил итә.

Унан Сыртлановтарҙың урта хәлләләренең Октябрь революцияһына күпме ер биләмәләре, күпме мал, күпме мөлкәт менән килгәнлеген дә айырым-асыҡ күреп була.

Дөйөм алғанда, Сыртлан ауылы Сыртлановтары уртаса 10—20 баш мал аҫырай, 20—30 дисәтинә ер биләй. Хәлһеҙерәктәренең ере лә 10 дисәтинәнән әллә ни кәм түгел. Аҫыраған малына күрә көтөү ере, бесәнлеге еткелек. Иген-ашлыҡты ла ғаиләгә етерлек сәсәләр. Уртаса берәр дисәтинә, дисәтинә ярым тирәһе

арыш, бойҙай игәләр. Тары, ҡарабойҙай, һоло баҫыуҙары күберәк тә килеп сыға. Кәртә-ҡура янына йә баҫыуға ашарлыҡ ҡына бәрәңгеһен ултырталар. Игенде күберәк иккәндәре иген һатыу кәсебен дә тота. Ишле малды һуғымдан тыш һатыуға ла сығаралар. Йәғни һатыу-алыу кәсебе менән дә шөғөлләнәләр. Ерҙәре, малдары күберәктәр берәр хеҙмәтсе тотҡолайҙар. Уллы-ҡыҙлы ишле ғаиләләр үҙ көндәрен үҙҙәре күрә.

Ҡан яңыртыу өсөн уллы ғаиләләрҙең килендәрҙе сит ауылдарҙан төшөрөүе, ҡыҙҙарҙың күрше ауылдарға бирелеүе ауылдың ҙурайыуын, тирә-яҡ ауылдар менән туғантумасалыҡ, хужалыҡ бәйләнештәрен көсәйтә.

Төп ауыл Шланлыкүлдә, 1917 йылғы перепись күрһәтеүенсә, Сыртлановтарҙан бары 11 ғаилә күсмәй ҡалған. Бына улар:

1. Сыртланов Ташхәйдәр, 67 йәштә. Доктор. Бер улы,бер ҡыҙы бар. Бер хеҙмәтсе тота. 9 ат, 4 һыйыр аҫырай. Ваҡ малдары күп. 12 дисәтинә арыш, 8 дисәтинә һоло, 10 дисәтинә һабан ашлығы бойҙай, 3 дисәтинә ҡарабойҙай, 3 дисәтинә борсаҡ сәсә. Барлығы 36 дисәтинә һөрөнтө ере бар. Бөтә ер биләме 48 дисәтинә.

Эш ҡорамалдары, мөмкинлектәре: өс тимер һабан, арбалар, урғыс, молотилка.

2. Сыртланов Мөнәуир. 42 йәштә. Бер улы, ике ҡыҙы бар. Хеҙмәтсе тота. 4 ат, 4 һыйыр, 15 баш ваҡ мал аҫырай.

20 дисәтинә һөрөнтө ере, 6 дисәтинә бесәнлеге бар. Йәмғеһе 40 дисәтинә. 5 дисәтинә арыш, 3 дисәтинә һоло, 3 дисәтинә һабан ашлығы, ярты дисәтинә тары, ярты дисәтинә ҡарабойҙай, бер дисәтинә борсаҡ сәсә. Барлыҡ һөрөнтө ере 20 дисәтинә.

3. Сыртланов Рөстәмбәк, 45 йәштә. Бер хеҙмәтсе тота. 5 ат, 4 һыйыр, 18 баш ваҡ мал аҫырай. 20 дисәтинә ере бар.

4. Сыртланов Ғоссаметдин. 32 йәштә. Ике улы, бер ҡыҙы бар. Бер хеҙмәтсе тота. 3 ат, 2 һыйыр, 14 баш ваҡ мал аҫырай.

5. Сыртланов Ғисаметдин, 68 йәштә. Ике улы, бер ҡыҙы бар. 15 баш мал аҫырай. Биләм ере 32 дисәтинә.

6. Сыртланов Сәйәхетдин, 38 йәштә. Бер улы, бер ҡыҙы бар. Малы, ере-фәләне юҡ.

7. Сыртланов Әбделхаҡ, 41 йәштә. Ике улы, ике ҡыҙы бар. 3 ат, 2 һыйыр, 12 баш ваҡ мал аҫырай.

8. Сыртланов Айдар, 53 йәштә.

9. Сыртланов Миңлеғазиндар. 30 йәштә. Бер улы, бер ҡыҙы бар.

Был исемлектән күренеүенсә, Шланлыкүлдә ҡалған Сыртлановтарҙың бер нисәһе шаҡтай хәлле крәҫтиәндәр, Ташхәйдәр доктор кеше. Ҡалғандары ярлылар.

Шланлыкүл ауылында электән арендаға ер алып, хәҙер төпләнеп киткән мишәр ғаиләләре ишәйгән. Саҡаевтар, Ҡоҙаяровтар, Чанборисовтар, Мәүлетовтар, Байковтар, Дашкиндар ғаиләләре шундайҙар. Улар араһында ла байы, ярлыһы бар.

Әммә дөйөм алғанда, Шланлыкүл ауылы Октябрь революцияһына иркен ерле, мөлкәтле, маллы крәҫтиәндәр йәки дворян, мырҙа заттары хәлле булып килеп еткәнлеге мәғлүм.

1920 йылдағы халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәренә күҙ һалғанда, революция, граждандар һуғышы арҡаһында, бөтә илдәге кеүек, Шланлыкүл, Сыртлан ауылдарының да күпкә бөлөп, малдары бик аҙайып ҡалғаны айырым-асыҡ.

Сыртлановтар һәм әле исемләгән затлы ғаиләләрҙең Октябрь революцияһынан һуң, халыҡ әйтмешләй, сабаталы дворяндарға, сабаталы мырҙаларға төшөп ҡалғанын күрәбеҙ.

Тарихтың төрлө дәүерҙәрендә күтәрелгән, унан төшөп ҡалған, хатта онотолоуға дусар ителгән Солтанов, Сыртланов кеүек затлы династияларҙы ғалимдарыбыҙға ныҡлап өйрәнәһе бар әле. Шундай заттарҙы өйрәнмәй һәм белмәй тороп, яҡын һәм йыраҡ замандарҙағы тарихыбыҙҙы, атаҡлы шәхестәребеҙҙе, милли интеллигенция вәкилдәрен тулы белеү һәм тейешенсә баһалау мөмкин түгел.